ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

25-31 июль (майай) 2020

№30 (916)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Бөтә балалар ҙа... урта мәктәпте тамамлаһын" 3



Туғандарың - ҡулың менән аяғың, дуҫтарың - таяныр таяғың 7



Өсөнсө баланан һуң... донъябыҙ теүәлләнде 8-9



Ҡорбан ғәйете мөбәрәк булһын! 13



ТВ-программа 14

*Урман - биҙәк. Тик бер-ике йылда кейеп туҙҙырып, яңыһын алмаштыра торған күлдәк түгел ул, изге ер биҙәге. Ә ер - мәңгелек. Шуға күрә уның биҙәген уңдырмау өсөн айырыуса һаҡ ҡыланырға кәрәк.*

***Ноғман МУСИН.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мал аҫраған ауыл кешеләре өсөн иң яуаплы бесән әҙерләү мәле. Ул эштәр хәҙер нисегерәк атҡарыла икән?



**Әкрәм КӘЙЕПҠОЛОВ, пенсионер, Баймаҡ районы:** Хәҙер халыҡ элекке, совет заманындағы кеүек, ыҙалап бесән эшләмәй, салғы онотолдо, тиерлек. Трактор, бесән сапҡыс техника менән саба ла, КУН-10 менән тейәп, ыңғайы бер ташып та бирәләр, аҡсаң ғына булһын. Элекке кеүек күкрәкләп кәбән ҡойоп, уны оҫта итеп тороп ослаусылар ҙа "Ҡыҙыл китап"ҡа инделәр. Элек колхоз бесәнде звеноларға бүленеп, ҡырҙа ҡыуыш ҡороп, ҡуна ятып эшләтә торғайны. Һәр звенола ат менән сапҡыс, ат тырмаһы булды, ә инде ҡул менән сабыусылар өсөн салғы сүкеүсе, тырма, һәнәк һаплаусы оҫталар ҙа тәғәйенләп ҡуйыла ине. Иртәнге салғы сүкегән тауыш һаман да ҡолаҡта сыңлай һымаҡ. Ул әллә ҡайҙарға яңғырап тороп, ул тауышҡа ҡушылып, үтәбикә һайрап ебәрер ине... Таң беленә башлау менән өлкәндәр иртәнге һыуһын тип, салғыларын йөкмәп, бесән саба китәләр. Малайҙарға ла оҙаҡ иркәләнеп ятыу эләкмәй, уларҙы уятып, ат алып килергә ебәрәләр, сөнки һәр кемгә лә эш күп бесәндә. Кис усаҡ янында ултырыуҙар, ун көн һайын тәкә һуйып, ҡымыҙ эсеп һыйланыуҙар үҙе бер ғүмер, һағынып һөйләргә генә ҡалды. Колхозға ана шулайтып күмәкләп эшләп бөтмәйенсә, халыҡҡа үҙенә бесән эшләү тыйылды. Аҙаҡ инде кем нисек булдыра ала - шулай эшләп ала ине: күбеһе өмә яһап саптыра. 10-15 салғысы төшөп китә... Сабынды бер көндә һыпыра ла ҡуялар. Хәҙер туғай яңғыратып салғы сүкеүҙәр онотолдо. Сапҡаны яйлап сабалыр ҙа, тик барыбер хәҙер кеше ыҙаларға теләмәй - тамам техникаға һалынды: трактор саба, тырмата, өйә. Ҡайһы берәүҙәр рулонға преслап, өйөнә әҙер бесәнде ташый ҙа башланы инде.

**(Дауамы 2-се биттә).**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# АСЫҠ ҺАУАЛА...

## кино ҡарайбыҙ

**Ҡала был эҫе йәй көндәрен ҡояшта ҡыҙған таш биналарҙа уҙғарыуы, ай-һай, еңелдән түгел. Шуға ла халыҡ кис булһа, урамдарға эркелә, әммә быйылғы зәхмәтле көндәрҙә кистәрен күмәкләп парктарҙа йөрөү ҙә, тәғәмханаларҙа аралашып ултырыу ҙа, байрам саралары һәм концерттарҙа ҡатнашыу ҙа ҡаты сикләнде. Ләкин ошо көндәрҙә Өфө ҡала хакимиәте тырышлығы менән был хәлгә бер аҙ еңеллек өҫтәлгәндәй булды: М. Ғафури исемендәге Мәҙәниәт һәм ял итеү үҙәк паркында автокинотеатр асылды.**






"Өс шөрөп" ("Три шурупа") тип аталған яңы автокинотеатр парктың йәйен карттарҙа, ҡышын конькиҙа йөрөй торған майҙансығында урынлашты. Автокинотеатр заманса светодиод экран менән йыһазландырылған, ойоштороусылар әйтеүенсә, Өфөлә уға оҡшаштары әлегә булмаған. Тамашасылар үҙ автомобиленән сыҡмай ғына, радиоалғыстарын 94.00 ФМ йышлығына көйләп, кинолентаның тауышын тыңлай ала. Ә "тамаша залы"на иң кәмендә 54 автомобиль һыя, майҙанға инеү һәм сығыу юлдары ла тығындар барлыҡҡа килтермәҫлек итеп, айырым эшләнгән. Өфөләрҙең яңы ял итеү урынының тағы бер ыңғай яғы - тәмлекәстәр һатылған кибеттәрҙә. Унда фильм ҡараған арала тамаҡ ялғап алырға мөмкин. Бер һүҙ менән әйткәндә, баш ҡаланың ҡап уртаһында урынлашыуға ҡарамаҫтан, шау-шыуҙан алыҫта, тирә-яғы ағастар менән уратып алынған йәмле генә урында ауыр эш көнөнән һуң ял итергә бар уңайлыҡтар ҙа тыуҙырылған.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

**✓ Үҙҙәре йәштәр, ирҙәре лә бар, тик бына, бесән эшләүе ҡыйын, алыҫ, эҫе тип, ҡырҡ һылтау табып, малдарын бөтөрөп, һалҡын өйҙә ятыуҙы хуп күрәләр беҙҙә кешеләр.**



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# АСЫҠ ҺАУАЛА... кино ҡарайбыҙ

(Башы 1-се биттә).

"Өс шөрөп" автокинотеатрын асыу тантанаһына баш ҡала хакимиәте 14 етем балалар һәм патронат ғаиләләрҙә тәрбиәләнеүселәрҙе саҡырҙы. Улар өсөн Ҡала мәҙәниәт йорто артистары ҡатнашлығында концерт, "Ретро Гаражъ Пск-6" ретро-автомобилдәр музейы экспонаттарынан күргәҙмә, төрлө күңел асыу саралары ойошторолдо. "Өс шөрөп" автокинотеатры тәүге тамашасыларын "Арахисовый сокол" атамалы 2019 йылғы Америка фильмы менән ҡаршыланы. "Был проектҡа бик күп креатив идеялар һалынған һәм өфөләргә быйылғы йәйҙе тойоп ҡалыу өсөн барыһы ла эшләнелгән. Коронавирус пандемияһы күп сикләүҙәр индереүгә ҡарамаҫтан, яҡын кешеләрең менән, яратҡан автомобилеңдә йәйге кистәрҙе ҡыҙыҡлы үткәреү һәм донъя кинематографының классик, иң яҡшы фильмдарын ҡарау мөмкинлеге бирелә. Бөгөн төнгө 12-лә яңы автокинотеатрҙың үҙ тормошо башлана һәм тәүге булып күрһәтеләсәк фильм - "Арахисовый сокол". Бихисап кинотаҫмалар араһында тап ошоһона туҡталыуыбыҙ сәбәбе - фильм һәр кемгә шәфҡәтле һәм мәрхәмәтле мөнәсәбәттә булыу, яратып ҡарау кәрәклеген, яратҡанда тормошҡа ашыра алмаҫлыҡ бер нәмә лә булмауын тойорға ярҙам итә", - тине был хаҡта Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сәләймәнова.

"Өс шөрөп" автокинотеатрының тәүге тамашасылары техник йәһәттән сифатлы тамашанан да, ойоштороусыларҙың иҫтәлекле бүләктәренән дә ҡәнәғәт ҡалыуын белдерҙе. Әммә бәләкәй балалары менән килеүселәр генә фильмдар бик һуң ваҡытта күрһәтелеүен атап үтте, шулай ҙа йәштәр өсөн бик тә ҡулай булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алдылар. "Беҙ бөгөн өлкән ҡыҙым Дамира, ейәнсәрем Индира, тәрбиәгә алған ҡыҙҙарым Алина һәм Диана менән күмәкләп килдек. Форсат тейгән һайын ғаилә менән ял итергә яратабыҙ, шуға автокинотеатр асылыу яңылығын бик шатланып ҡабул иттек. Балалар бында боронғо автомобилдәрҙе ҡарап, эргәһендә тороп фото төшөп мәж килделәр, тәғәмхананан һуттар алып та эсеп өлгөрҙөләр. Ә инде фильмға килгәндә, "Арахисовый сокол" бик оҡшаны, бер-беренә ҡарата яҡшы мөнәсәбәттә булырға, үҙ көсөңә ышанырға өйрәткән шул тиклем фәһемле кино. Урыны-урыны менән көлкөлө лә, балалар ятып көлә-көлә ҡараны. Шулай ҙа минең кеүек хаҡлы ялда булғандар өсөн сеанстар ваҡыты бер аҙ һуңыраҡ, өйгә ҡайтып еткәнсе лә сәғәт бер булып китә", - тип һөйләне Өфөнән тамашасы Нәсимә Сәйетова.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш ҡала халҡының ялын мәҙәниле ойоштороу өсөн быйыл ярайһы уҡ күп уңайлыҡтар булдырыла. Әле генә "Бейеүсе торналар" фонтаны асылһа, тиҙҙән Ағиҙел ярындағы эштәр тулыһынса тамамлана тип көтөлә, бына яңы автокинотетар ҙа барлыҡҡа килде. Әммә беҙгә ошо күп көс һалып, яҡшы ниәттәрҙән сығып атҡарылған эштәрҙең баһаһын белергә, һаҡлыҡ менән ҡарарға өйрәнергә ҡала.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мал аҫраған ауыл кешеләре өсөн иң яуаплы бесән әҙерләү мәле. Ул эштәр хәҙер нисегерәк атҡарыла икән?



(Башы 1-се биттә).

***Зәкиә БАЙҒОТЛИНА, йорт хужабикәһе:*** Тәүҙән үк шундай шартымды әйтеп китәйем: район менән ауылымды ла , ысын исемемде лә әйтмәй яҙыуығыҙҙы һорайым, сөнки беҙҙә "Киске Өфө" гәзитен яратып уҡыйҙар, шул иҫәптән, үҙем дә унан байтаҡ йылдар айырылғаным юҡ. Шуға күрә форсаты тыуғанда күңелемдә көйөк булып торған нәмәләрҙе әйтеп ҡалайым, тием. Ихтимал, ҡайһы берәүҙәр, айырыуса туғантыумаса үҙҙәрен таный ҡалһа, үҙемә уңайһыҙ булыр, юғиһә. Яман-яҡшы булһалар ҙа, миңә бит улар менән йәшәргә.

Бөгөнгө көн бесән эшләү ауылда бик ҙур проблема булды ла китте. Техникаһы бар кешеләр хаҡында түгел, ә бына ярты-йорто, ярҙамсыһыҙ йәшәгән ҡатынҡыҙ, пенсионерҙар хәлен күҙҙә тотоп әйтеүем. Кеше ыңғайына мал көтөп йәшәге килә бит әле, бер баш һауын һыйырың да булмаһа, аҡһыҙ ҙа нимә тип ауылда йәшәмәк кәрәк. Ғүмер буйы мал көсө менән донъя көттөк. Шөкөр, тамағыбыҙ һыйлы, табыныбыҙ тулы ризыҡ булды: һөтө, ҡатығы, ҡорото, ҡаймағы, майы, эремсеге - һанап та бөтөрлөк түгел инде ул аҡтан бар булған ризыҡ төрҙәрен. Ҡапылғара шыжлатып ҡына ҡоймаҡ ҡойорға ла бит һөт кәрәк, ә ауыл һөтө менән теләнде йоторлоҡ була бит ул. Йәй көндәре миндә ятһалар, балалар, ейәнейәнсәрҙәрҙең тамағы һыйлы. Шулар өҫтөнә ҡайһы берәүҙәр, апай, бер банка ғына ҡаймаҡ һатып бирсе, балаларға ашатам, тип инәлеп килеп тора. Ундай меҫкендәрҙең аҡсаһын алырға ҡул тартмаһа ла, йәлләп биреп тә сығараһың инде. Үҙҙәре йәштәр, ирҙәре лә бар, тик бына, бесән эшләүе ҡыйын, алыҫ, эҫе тип, ҡырҡ һылтау табып, малдарын бөтөрөп, һалҡын өйҙә ятыуҙы хуп күрәләр беҙҙә кешеләр. Әлләсе, заманында бала саҡтан уҡ атайәсәйгә эйәреп, ҡулға һәнәк, салғы тота башланыҡ, артабан үҙаллы донъя ҡорғас та ғүмер буйы ҡул көсө менән эшләп ала инек бесәнде. Беҙҙә урман яғы, колхоз булмағас, бесән эшләүсе техника ла юҡ ине ул саҡ. Шуға ҡарамаҫтан, берҙе генә түгел, үлән үҫкән йылдарҙа 5-6 кәбән ултырта инек әле. Бер кәбәндә кәмендә 25-30 күбә була. Әлеге көн яңғыҙ һыйырға бер кәбәнде лә еткерергә булдыр ине, тик эшләргә теләмәйҙәр. Ялҡауҙар тип әйтәйемме, дөртһеҙҙәрме - донъя көтөргә барымдары юҡ ҡайһы берәүҙәрҙең. Ҡартымдың вафатынан һуң яңғыҙ тороп ҡалһам да, көн күргән һыйырымды тотонорға уйым юҡ әлегә. Хәл барса тырышырмын, тием, сөнки ситтә йәшәгән балалар, уларҙың балалары ҡайтып-китеп йөрөй, мин уларҙы таныҡ ауыл ризыҡтары менән дә һыйлай алмаһам, оят бит! Шөкөр, улар йыл да 1-2 аҙналап булһа ла бесән эшләшеп, апаруҡ ярҙам итеп китәләр. Быйыл бынау коронавирус арҡаһында тотҡарланып торалар: бер ҡыҙым менән киленем дауаханала эшләйҙәр. Улар ҡайтҡансы эште бөтөрә торорға уйлап, апай, үҙемә эшләгәс тә һинә сабып-йыйып бирәм, тигән һүҙенә ышанып, ауылдың бер кешеһенә аҡса тоттороп сығарҙым да хәҙер бына борсолоп ултырам. Беларусы менән күршеһенә саба барған та, тегеһе эсереп ташлаған. Исмаһам, аҡса ғына бирһәсе, юҡ, хәйләкәр нәмә: арзан араҡыға "һыйлаған", ҡәһәрең. Бынау эҫелә кешене үлтереп ҡуйыуҙан да ҡурҡмайҙар бит. Элек туғандар, күрше-ара өмәләшеп-бергәләшеп кенә ҡалҡыта ла ала инек бесәнде, хәҙер туғандарға ла әллә ни булды, ярҙам итеү түгел, хәл дә белмәйҙәр. Аптырайым, ни булды был донъяға?..

***Фәрхизә ШАЙМОРАТОВА, йорт хужабикәһе, Яңауыл районы:*** Хәҙер элекке кеүек бесән әҙерләүҙәр бөттө шул. Эй һағынам бесән сапҡан саҡтарҙы! Атайым лесник булғас, иң яҡшы ерҙәрҙә ине сабынлығыбыҙ. Марал боландар өсөн дә бесән әҙерләй инек. Бесән сабырға әле лә яратам, тик салғымды сүкеп бирергә атайым ғына юҡ... Ә ул сүкеш-түш тауышы үҙенә генә хас бер моң тарата ине. Ҡыштыр-ҡыштыр бакуй йыйыуы, унан күбәләйһең. Иң күңеллеһе - кәбән ҡойоу. Күбәләрҙе тарттырып, бер урынға йыяһың. Атай кәбән һала. Апайым кәбән башында тора, уны ҡәләм кеүек итеп ослап ҡуйыр ине. Уның кәбәндәренә бер ҡасан да һыу үтмәне. Ә инде бесәндә эскән хуш еҫле ҡыр сәйенең тәме һаман да онотолмай: мәтрүшкә, ҡарағат, ҡурай еләге һалып ҡайната инек. Шуның өсөн дә арыуҙың ни икәнен дә белмәнек. Ә бит күп итеп әҙерләй инек беҙ бесәнде. 3 баш һыйыр, 3 башмаҡ, ат, утыҙлап ваҡ мал, быҙауҙар бар ине хужалығыбыҙҙа. Уларға ҡыш сыҡҡансы етерлек итеп эшләйбеҙ. Ул ваҡыттарҙа өмәләрҙә ярышып бесән сабып, кәбән һалып, бер-беренә ярҙам итеп, күңелле йәшәне халыҡ. Ә хәҙер техника саба, йыя, рулонға ҡыҫып, әҙерләп тә бирә. Унан бит хәҙер малды аҙ тотҡас, бесән дә күп кәрәкмәй. Беҙҙә хәҙер кеше заказ ғына бирә, рулоны менән килтереп тә ҡуялар. Ҡырға, баҫыуға сығып, һабан турғайының баш осонда ғына ҡыҡтәргә аҫылынып тороп һайрауын тыңлау - үҙе бәхет бит ул. Үкенескә, хәҙер ауыл балаһы ла һабан турғайының ниндәй ҡош икәнен белмәй. Ә мин бәхетле, сөнки бала сағым иркен, хуш еҫле болондарҙа йәйҙең бөтөн хозурлығын күреп, ҡоштар йырын тыңлап үтте.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 23 июлгә 6463 коронавирус инфекцияһы осрағы теркәлгән. Бер тәүлектә республикала сирлеләр һаны 37-гә артҡан. 6463 сирленең 4775-е һауыҡҡан. Тәүлек эсендә Башҡортостанда коронавирус инфекцияһынан вафат булғандар теркәлмәгән һәм элеккесә 21 кеше тәшкил итә. Пандемия башланғандан алып Рәсәйҙә бөтәһе 795 меңгә яҡын COVID-19 осрағы асыҡланған. Уларҙың 5,8 меңдән ашыуы - һуңғы тәүлектә. Ошо ваҡыт эсендә 580 меңдән күберәк кеше һауыҡҡан. 12,8 меңдән ашыу кеше донъя ҡуйған. Уларҙың 147-е - һуңғы тәүлектә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 20 июлдә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә билдәләүенсә, төбәктә коронавирус буйынса ағымдағы режим һаҡлана. "Коронавирус бер ҡайҙа ла китмәне. Эйе, үлем осрактары кәмей бара, ләкин Башҡортостанда көн һайын бер нисә тиҫтә сирлене теркәйбеҙ. Беҙҙә Учалы районында урынлашҡан психоневрология интернатында табылған сир сығанағына бәйле осраҡтар күбәйеп китте...", - тине республика Башлығы.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров эш сәфәре менән Ауырғазы районына барҙы. Бында республика етәксеһе "Урожай" компаниялар төркөмөнөң инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу барышы менән танышты. Ишле ауылында 6 530 баш эре малға иҫәпләнгән һөтсөлөк фермаһы төҙөлөшөн ҡараны. Киләһе ике йылда бында 5 мең баш һауын көтөүе өсөн һыйыр, быҙау аҙбарҙары, һауыу-һөт блогы һәм башҡа өҫтәмә биналар һалыу планлаштырыла.

✓Башҡортостандың урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов республикала урман янғындары менән бәйле хәл тураһында хәбәр итте. Төп янылыҡ - 21 июлдә 21:20 сәғәттә Башҡортостан ҡурсаулығында янғын һүндерелде. Көн дауамында алты янғын һүндерелде, уларҙың икәүһе - Әбйәлил, икәүһе - Белорет һәм береһе Мәләүез райондарында. Белорет һәм Бөрйән райондарында өс янғынды һүндереү тамамланып килә. Тораҡ пункттарға хәүеф янамай.

✓Башҡортостанда 20 июлдән мәктәп яңы һәм ҡала ситендәге лагерҙарҙың эшләй башлауын йәнә күсереүҙәре сәбәпле онлайн-сменалар асылды. Был хаҡта социаль селтәрҙәге сәхифәһендә республика хөкүмәте вице-премьеры Фәнүр Йәғәфәров хәбәр итте. Дөйөм алғанда, Башҡортостандан һәм илдең башҡа төбәктәренән 89 меңдән ашыу бала онлайн-сменаларҙа ҡатнашты ла инде.

*ШАҢДАУ*

# "БӨТӘ БАЛАЛАР ҘА... урта мәктәпте тамамлаһын"

**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы Ҡасим Әлибаевтың "Киске Өфө" гәзитенең 27-се һанында баҫылып сыҡҡан ошондай атамалы мәҡәләһендә уҡытыу системаһында эшләгәндәрҙең барыһын да борсоған проблема яҡтыртыла. Автор бик күптәр - ата-әсәләр, уҡытыусылар, уҡыусылар өсөн көнүҙәк мәсьәләләрҙең айышына төшөндөрөргә тырыша. Оҙаҡ йылдар эшләгән педагог булараҡ, мин дә ул күтәргән проблеманы бик урынлы тип иҫәпләйем һәм хаҡ һүҙҙәре менән килешәм.**



Үткән быуаттың етмешенсе йылдарында Баймаҡ районы Ниғәмәт урта мәктәбендә талантлы педагог - директор булып эшләгән Лоҡманов Мансур Ибәтулла улының эш алымы хәтергә төшә. Ул һигеҙ (хәҙерге - туғыҙ) класты тамамлаған балаларҙы мәктәптән ебәрмәҫкә тырыша ине. Ата-әсә, балам техникум, педучилищеға уҡырға китә, тип документ һорап килһә, уның бер генә яуабы булды: "Балаларығыҙҙы ирекҡә ебәреп, үҙегеҙгә эште еңеләйтәһегеҙме? Ниңә ун класты тамамлатмайһығыҙ, әҙ булһа ла быуыны нығыр ине. Уйлағыҙ". Уның шул һүҙҙәре күптәрҙе урта мәктәпте тамамларға күндерҙе. Ваҡыт үтеү менән урта мәктәпте тамамлау мәжбүри булған осорҙо ла күрергә насип булды. Туғыҙ класс тамамлап, унынсыға уҡырға килеп, уны ташлаусылар булған осраҡта директор, завучтарға талап ҡаты ҡуйылды.

Ә бына 80-се йылдар аҙағына туғыҙынсы синыфты тамамлау менән, балаларҙы СПТУ, ГПТУ-ларға, техникум, педучилищеларға ебәреү ата-әсәләр тарафынан да, мәктәп тарафынан да хуплау тапты. Ун биш йәше яңы тулған балаларҙың өйҙән, яҡындарынан айырым йәшәп, үҙенде ирекле тойоу ошолай була икән тип уйлап, хата юлға баҫҡан осраҡтарҙы ла күрергә, ишетергә тура килде. СПТУ, ГПТУ педагогтары мәктәптәрҙә осрашыуҙар үткәреп, бик күп вәғәҙәләр менән балаларҙы үҙҙәренә уҡырға саҡыра торғайны. Мәктәп иһә был ситуацияны яҡшы уҡый алмағандарҙан ҡотолоу сараһы итеп ҡабул иткәндәй ине.

Ваҡыт үтеү менән бындай агитация, мәктәптәр буйлап йөрөп уҡыусылар йыйыу бөттө. Сөнки бөтә күренештәргә Берҙәм дәүләт имтиханы сик ҡуйҙы. Ошо имтихандарҙан ҡурҡып, балалар төп белем тураһында аттестат алалар ҙа, мәктәптән китеү яғын ҡарайҙар. Уның ҡарауы, хәҙер ПТУ, техникум, училищеларға элеккесә уҡыусы эҙләп йөрөйһө түгел, уларҙың баһаһы күтәрелде.

Мин үҙем эшләгән мәктәп миҫалында ғына фекер йөрөтһәм дә, башҡа мәктәптәрҙә лә шул уҡ хәл икәнен тоям. Ата-әсәгә килгәндә, улар инде балаларын түләп булһа ла уҡытырға әҙер. Балалар уҡып йөрөймө, эшләйме, урлашамы, әллә бөтөнләй икенсе юлдамы - был проблема уларҙы артыҡ борсомай. Шулай булмаһа, хәҙерге ваҡытта уҡыусының белем алыуын төп урынға ҡуйып, тәрбиәне икенсел проблема, тип ҡарамаҫтар ине. Ә бит төп урында, нимә генә тиһәләр ҙә, тәрбиә булырға тейеш. Тәү сиратта ғаилә тәрбиәһенә ныҡлы иғтибар бүлергә кәрәк, ә уның кимәле уҡытыусының тәрбиәсе ролен үтәп, ата-әсә менән даими эшләүенән тора. Уҡытыусының мәктәптәге төп роле - тәрбиәсе булыуҙа һәм тәрбиәгә ярашлы белем алыуҙың мөһимлеген еткерә белеүҙә. Ә инде тәрбиәле бала Берҙәм дәүләт имтиханымы, башҡа төрлө һынаумы - әҙер була. Әммә тәрбиәләү икенсе дәрәжәләге мәсьәлә итеп баһаланыуына ла ике тиҫтә йыллап ваҡыт үтте хәҙер. Ә бит тәрбиәле бала үҙенең ҡылыҡтарын баһалай белә, үҙендә талапсанлыҡ тоя, белемгә аңлы рәүештә ынтыла. Бына ни өсөн балаларҙың ун ете йәше тулғансы өйҙә - атай-әсәй тәрбиәһендә булыуы бик мөһим.

Мәктәптә белем биреүҙе тәрбиә менән тиң алып барыуҙан тыш, элеккесә, балаға үҙ ауылында имтихан тапшырып, урта мәктәпте тамамларға мөмкинлек биреү мөһим. Ошо йәһәттән Берҙәм дәүләт имтихандарын юғары уҡыу йортона барыусылар ғына тапшырһа, бик уңай буласаҡ. Уҡытыусы үҙ предметы буйынса Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыуға ныҡлыраҡ әҙерләйәсәк, тик юғары уҡыу йортона бармайым, тигәндәр ҙә ынтыласаҡ. Балаларҙа бер-береңдән аҡ көнләшеү менән янғандар юҡ түгел, тимәк, ундайҙар ҙа уҡыуға тырышлыҡ һаласаҡ.

Унан һуң, мәҡәлә авторының тағы бер фекеренә - ауыл мәктәптәрен ябыуға битараф ҡала алмайым. Мәҫәлән, ваҡытында гөрләп торған Түбәнге Яйыҡбай ауылында (Баймаҡ районы) хәҙер ҡырҡлап өйҙә генә кеше йәшәй, ҡалғандары буш. Сөнки мәктәп ябылды, ә ҡасандыр өсдүрт уҡытыусы башланғыс класта белем бирә ине. Кеше иҫәбенә ҡарап мәктәп, клуб, медпункттарҙың ябылыуы ауылдарҙы бөтөрөргә тигән уй менән эшләнәләр, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ауылдарҙа ябылған мәктәптәр, бигерәк тә башланғыс мәктәптәр кире ишектәрен асһын ине. Балалар ата-әсәһе ҡанатына һыйынып, тейешле тәрбиә һәм мотлаҡ урта белем алыуға хоҡуҡлы түгелме ни? Ата-әсәләр, уҡытыусылар һәм етәкселәр был хаҡта ни тиер?**

**Рәйсә ИҪӘНБАЕВА,**
**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы алдынғыһы, Баймаҡ районы.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**"Киске Өфө" гәзитен яратып уҡыйым. Һәр мәҡәлә уйландыра, зиһенде яҡтырта. Тәрбиәүи әһәмиәтен әйтеп тораһы ла түгел. 27-се һанындағы "Бөтә балалар ҙа урта мәктәп тамамлаһын" исемле материалды уҡығас, уйға ҡалдым. Ундағы фекерҙәр менән тулыһынса килешәм. Бик дөрөҫ яҙылған.**

Беҙҙең ауылда ла шул оптималләштереү, ҡулайлаштырыу тигән булып, бына тигән һигеҙ йыллыҡ мәктәпте ябып ҡуйҙылар. Исмаһам, балаларыбыҙ башланғыс мәктәпте үҙ атай-әсәһе, өләсәй-олатаһы янында уҡыһын ине. Туған телгә лә, тарихыбыҙға, мәҙәниәтебеҙгә һөйөү, ихтирам, ғөмүмән, милли тәрбиә йәш быуынға тап ошо осорҙа һалына бит. Әгәр ҙә ошолай дауам итһә, милләтебеҙҙе юғалтыу, ситкә йөрөп уҡыған балаларыбыҙҙың үҙ туған телен онотоу хәүефе лә бар. Улай ғына ла түгел, ғаилә тәрбиәһе лә аҡһаясаҡ, сөнки иртән иртүк сығып киткән балалар бер-береһен көтөп, һуң ғына ҡайта. Аҙна буйы интернатта ятыу ҙа, нисектер, барыбер бала һәм атай-әсәй, олатай-өләсәй араһын һыуыта тип уйлайым. Иң ауыр замандарҙа ла хатта бәләкәй ауылдарҙа мәктәптәр төҙөлдө, асылды, эшләне, хәҙер еңеллеккә күскәс, уҡыусы һаны аҙ тип, күпме мәктәп ябылды. Был төптө дөрөҫ түгел, тип иҫәпләйем. Ошо халыҡ фекере барып етһен ине өҫтәге етәкселеккә.

**Юламан РАЕВ,**
**Баймаҡ районы Шүлкә ауылы имам-хатибы.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## СЫРМАЛСЫҠ СЫРМАМАҺЫН...

**Баҡсамдағы бер гөлөмдө сырмалсыҡ быуып алған. Күрмәй ҡалғанмын, ахыры. Нескә генә һабын тотошлайы менән уралтҡан. Гөлөмдө арындырырға була, сырмалсыҡты һаҡ ҡына тартҡысланым да ул, һуңлағанмын. Тартҡан һайын бер быуыны киҫелә. Мәлен үткәргәнмен. Ә уйҙарым был юлы ла әллә ҡайҙарға алып китте мин хыялыйҙы...**

Ниндәйҙер мәғәнәһеҙ, шул мәғәнәһеҙлеге менән аяуһыҙ ҡапма-ҡаршылыҡҡа сырмала барабыҙ түгелме ул беҙ ҙә? Ниндәйҙер бер ваҡиға ҡалҡып сыҡҡан һайын халҡыбыҙ күрәләтә бүленә, тарҡала, киҫелә. Бына әле урман янғындары ла йәмғиәтте икегә айырҙы һымаҡ. Ауылдарҙағы халыҡ беткә үсегеп, тунын утҡа ташларға әҙер, тигән хәбәр таралды. Аңлар хәлдәмен мин уларҙың кисерештәрен. Ләкин был осраҡта ҡыл өҫтөндә тотош урман бит. Тотош урман, урмандағы тереклек. Ситтән килгән ҡуртымсылар ҡайтыр ҙа китер ул. Беҙ бит бында йәшәйбеҙ. Тунибыҙ-урманыбыҙ беҙҙең генә тәнебеҙгә, йәнебеҙгә яҡын. Түрәләребеҙ ҙә, моғайын, Мәскәүгә, сит илгә ҡасмаҫ. Ҡасһалар ҙа, "Башҡортостан" тигән ҡан тамырҙары һулҡылдар ҡайҙа ла. Төштәренә Уралыбыҙҙың тау-урмандары, сылтырап аҡҡан шишмәләре, олпат йылғалары инеп, тынғы бирмәҫ. Кендек ҡаны тамған ерҙең хикмәте һәр ерҙә эҙәрлекләй, тиҙәр бит...

Яңылыҡтар уҡыһаң, ҡараһаң, йөрәк урынынан ҡуба. Ағай-эне талаша, атҡа менһә яраша, тигән боронғолар. Яраштыра торған уртаҡ маҡсаттарға хеҙмәт итергә ваҡыт түгелме икән? Һәр көнө, һәр сәғәте, һәр йылы ҡәҙерле мәл бит. Аңыбыҙҙы "Үс, үпкә, битарафлыҡ" тигән сырмалсыҡтан һаҡлайыҡсы әле.

**Наилә ХАМБАЛЕЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостандан 20 мәктәп тамамлаусы Берҙәм дәүләт имтиханында 100 балл йыйған. Республиканың Мәғариф министрлығында билдәләүҙәренсә, география һәм әҙәбиәт буйынса имтихан һөҙөмтәләре уртаса балдың, юғары һәм йөҙ балға яҙылған эштәр һанының артыуын күрһәткән. Шулай итеп, республикала иң юғары балл алған уҡыусылар һаны 2019 йыл менән сағыштырғанда икәүгә күберәк.

✓ Башҡортостандан 55 табип коронавирус инфекцияһы менән көрәштә ярҙам итеү өсөн Ҡырғыҙстанға юлланды. Уҙған шәмбе табиптар төркөмө Амур өлкәһендә өс аҙнанан ашыу эшләп ҡайтты. Бынан алдараҡ республика табиптары Ҡарасай-Черкес Республикаһына барҙы. Бөгөнгә Ҡырғыҙстанда, coronavirus-control.ru порталы мәғлүмәттәре буйынса, 27 меңдән ашыу COVID-19 йоҡтороу осрағы теркәлгән. Меңдән ашыу кеше инфекциянан вафат булған.

✓ Башҡортостанда апрель-май айҙарында коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү 82-83 процентҡа тиклем кәмегән. 17 июлгә тиклем түләү 97,2 процентҡа тиклем тергеҙелгән. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров халыҡҡа тәртип өсөн рәхмәт белдерҙе һәм иң ауыр айҙарҙа ла түләү системаһы тигеҙлеген юғалтманы, шуға торлаҡ-коммуналь хужалыҡтың тотороҡло эшләүен билдәләне. Ул муниципалитет башлыҡтарына парктарҙы, ихаталарҙы, йәмәғәт биләмәләрен төҙөкләндереү эшен көсәйтергә ҡушты.

✓ Белорет үҙәк район клиник дауаханаһының элекке баш табибы Евгений Кустов Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Евгений Кустов яңы вазифала медицина эшмәкәрлеге хәүефһеҙлеген һәм сифатын контролдә тотоу мәсьәләләре өсөн яуап бирә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Евгений Кустов майҙа Өфөлә Ғ.Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының баш табибы вазифаһын башҡарҙы.

✓ Башҡортостан предприятиелары рапс һәм соя етештергән өсөн федераль субсидия алырға мөмкин. Республика ошо культураларҙы үҫтергән 39 төбәк иҫәбенә инде. Әлегә ошо мәсьәлә буйынса дөйөм мәғлүмәт кенә бар: дәүләт ярҙамы тышҡы баҙарҙа һорау менән файҙаланған майлы культураларҙы эшкәртеү продукцияһын етештереү күләмен арттырыуға йүнәлтелгән, тиелә.

*✓ 2020 йылда күберәк ауылдарҙы йәлеп итеү күҙаллана - һәр районда 50 проценттан кәм булмаған тораҡ пункт ҡатнашырға тейеш. 20 июлдән ғаризалар ҡабул итеү, ә 1 августан "Айыҡ ауыл - 2020" республика конкурсы башлана.*



ҠЫҪҠАСА

# СЫҒАРЫЛЫШ КИСӘЛӘРЕ

✓ **Шәмбе, 25 июлдә, Башҡортостанда мәктәп тамамлаусылар өсөн сығарылыш кисәләре ойошторола. Республиканың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин матбуғат конференцияһында уның нисек үтәсәге хаҡында һөйләне.** "Сығарылыш кисәләрен ойошторғанда, беренсенән, барлыҡ санитар-эпидемиологик талаптар үтәлергә тейеш. Икенсенән, Башлыҡтың указында билдәләнеүенсә, сарала 50-нән артыҡ кеше ҡатнаша алмай. Өсөнсөнән, быйыл уҡыусыларға һәм уларҙың ата-әсәләренә мәҙәни һәм дөйөм туҡланыу урындарына барыуҙан баш тартырға кәңәш бирәбеҙ", - тине министр. Ә Өфө хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә COVID-19 буйынса пандемия сәбәпле баш ҡала мәктәптәрендә сығарылыш кисәләре уҙғарылмауын хәбәр иттеләр.

✓ **Өс һәм унан күберәк балаһы булған хеҙмәткәрҙәр өлкән балаһына 18 йәш тулғансы үҙҙәренә уңайлы ваҡытта отпуск алырға мөмкин.** Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы тейешле федераль закон проектын Дәүләт Думаһына индерҙе. "Әлеге ваҡытта күп балалы хеҙмәткәрҙәргә өлкән балаһы 12 йәшкә еткәнсе отпуск алыу өсөн уңайлы ваҡыт һайлау хоҡуғы бирелә, - тип аңлатма бирҙе Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Ләкин 12 йәштә баланың хоҡуҡи статусы үҙгәрмәй. Ғаилә бала балиғ булғансы күп балалы тигән статусын һаҡлай. Был осорҙа ғаиләнең дәүләт билдәләгән хоҡуҡтар менән файҙаланыу мөмкинлеге булырға тейеш. Беҙ ошо льготаның көсөн оҙайтырға тәҡдим итәбеҙ". Хеҙмәт ҡануниәтенә тәҡдим ителгән төҙәтмә йәмғиәттә ишле ғаиләнең статусында ыңғай сағылыш табыр, тип иҫәпләйҙәр парламентта.

✓ **Башҡортостанда туристик-рекреация тибындағы "Урал" махсус иҡтисади зонаһын булдырыу эштәре башланды. Махсус иҡтисади зонаға Әбйәлил, Белорет, Бөрйән районлары инә. Был хаҡта республиканың Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе Салауат Нафиҡов белдерҙе.** План буйынса, быйыл дүртенсе кварталда үҫеш концепцияһы әҙерләнә, 2021 йылда - документтарҙы өйрәнеү, 2022 йылда - ғариза биреү кампанияһын үткәреү, 2023 йылдың беренсе ярты йыллығында - Рәсәй Федерацияһының Иҡтисади үҫеш министрлығына ғариза биреү, 2023 йылдың икенсе ярты йыллығында "Урал" махсус иҡтисади зонаһын теркәү планлаштырыла. Эштәр "2024 йылға тиклем Башҡортостан Республикаһы социаль-иҡтисади үҫешенең стратегик йүнәлештәре тураһында" указы сиктәрендә хөкүмәт вице-премьеры Рөстәм Моратов етәкселегендә алып барыла, тип билдәләне дәүләт комитеты рәйесе.

✓ **1 октябрҙән социаль пособиелар "МИР" картаһына ғына күсереләсәк. Был яңылыҡ социаль пособие алыусыларҙың һәммәһенә лә ҡағыла**. "Башҡа түләү системаларының карталарын файҙаланған алыусыларға уларҙы "МИР" картаһына алмаштырырға һәм актуаль реквизиттарҙы Республика халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге филиалына тапшырырға йә иһә быны Күп функциялы үҙәк бүлексәләре аша эшләргә кәрәк. 2020 йылдың 1 октябренән һуң социаль түләү башҡа системаларға (MasterCard, Visa) күсерелмәй", - тип билдәләнеләр Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтендә. Кемдәргә социаль түләүҙәр вклад буйынса иҫәпкә (һаҡлыҡ кенәгәһенә) күсерелә йәки почта менән килтерелә, уларға 1 октябрҙән бер ни ҙә үҙгәрмәй. Улар түләүҙәрҙе шул уҡ тәртиптә ала. Ойошманы һәм социаль түләүҙәрҙе алыу ысулын алыусы үҙе генә билдәләй. Теләгән ваҡытта аҡсаны килтереү ысулын үҙгәртергә мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ЕМЕШ-ЕЛӘК

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Шишмә районы буйлап эш сәфәре барышында урындағы емеш-еләк питомнигы эшмәкәрлеге, йәмәғәт биләмәләрен төҙөкләндереү пландары менән танышты һәм "Ауыл сәғәте"н үткәрҙе.**

Шишмә емеш-еләк питомнигы директоры Рәмил Ғәлиуллин һөйләүенсә, уҙған йылда концессия килешеүе сиктәрендә урындағы совхоздың милек комплексын 30 йылға ауыл хужалығы предприятиеһына тапшырғандар. Аграрийҙар районда емеш-еләк культураларын үҫтереүҙе тергеҙергә һәм Башҡортостан халҡын тәмле емеш-еләк, шулай уҡ сифатлы үҫентеләр менән тәьмин итеү өсөн етештереү ҡеүәтен арттырырға ниәтләй. Әйтәйек, 11,1 гектар майҙанда алма баҡсаһы ултыртылған да инде. Бында ҡулланыла торған заманса технологиялар ҡыҫҡа ваҡыт эсендә сикләнгән биләмәлә мул уңыш алырға мөмкинлек бирә. Башҡортостан Республикаһы вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов билдәләүенсә, баҡсасыларҙың һәм емеш үҫтереүселәрҙең реаль талаптарын иҫәпкә алыу өсөн субсидия бүлеү һәм ярҙам күләме механизмдары камиллаштырыла. Предприятие әле үк Башҡорт дәүләт аграр университеты менән әүҙем хеҙмәттәшлек итә, ә студенттар бында практика үтергә килә.

Радий Хәбиров ер еләге үҫтереү участкаһында ла булды. Шишмә емеш-еләк питомнигы үҙ продукцияһын балалар баҡсаларына һәм мәктәптәргә тапшыра. Республика Башлығы быны хупланы һәм Башҡортостанда үҫкән йәшелсәнең, емеш-еләктең мәктәп ашханаларында мотлаҡ булырға тейешлеген билдәләне. "Уҡыусыларға үҙебеҙҙең, Башҡортостанда етештерелгән, сифатлы аҙыҡ-түлекте ашатырға ниәтебеҙ бик етди, - тине Радий Хәбиров. - Беҙ мәктәп ашханаларына Башҡортостан ите килһен өсөн ҙур эпопея уҙҙыҡ. Был эште башлап ебәргәндә уның өлөшө 40 проценттан кәмерәк ине, ә хәҙер беҙ уны 86 процентҡа еткерҙек. Хәҙер уҡыусыларыбыҙҙың өҫтәлендә Башҡортостан йәшелсәһе, емешеләге булһын өсөн барыһын да эшләргә тейешбеҙ".

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Шишмә емеш-еләк питомнигы 1949 йылда, Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғандан һуң дүрт йыл үткәс ойошторолған.

# ЛАЙЫҠЛЫ ҠАРШЫЛАРҒА!

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Андрей Назаров 2021 йылда VI Бөтә донъя фольклориадаһын уҙғарыу мәсьәләләре буйынса эш кәңәшмәһе үткәрҙе.**

Билдәле булыуынса, 2020 йылда июлдең икенсе яртыһында Башҡортостанда VI Бөтә донъя фольклориадаһы үтергә тейеш ине, ләкин, башҡа бик күп күләмле саралар кеүек үк, пандемия арҡаһында 2021 йылға күсерелде. Фольклор һәм традицион сәнғәт фестивалдәрен ойоштороу буйынса халыҡ-ара совет менән килешеп, Фольклориаданы киләһе йылдың июлендә уҙғарыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова килтергән мәғлүмәттәр буйынса, унда 80 илдән коллективтар ҡатнашыуы көтөлә. 2020 йылдың 15 июленә 57 ил теркәлгән. Өфөгә Бөтә донъя фольклориадаһына бөтәһе 2500-гә яҡын кеше килеүе көтөлә. Республиканың 34 ҡала-районын үҙ эсенә алған ете фестиваль округы билдәләнгән. Фольклориаданың күсмә өлөшө ошо биләмәләрҙә үтергә тейеш. Андрей Назаров әйтеүенсә, әҙерлек буйынса төп саралар үткәрелһә лә, ҡалған ваҡытты мөмкин тиклем һөҙөмтәле ҡулланыу мөһим. "Республикаға бик күп ҡунаҡтар килә һәм уны яҡшы яҡтан күрһәтергә кәрәк. Ә беҙҙең күрһәтерлек нәмәләр бар. Башҡортостанда Фольклориада-2021 иң юғары кимәлдә үтһен өсөн хәҙер бөтәбеҙгә лә берләшеү зарур", - тине беренсе вице-премьер.

# АУЫЛДАР АЙЫҒА...

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте вице-премьеры Ленара Иванова етәкселегендә "Айыҡ ауыл 2020" республика конкурсын әҙерләү һәм уҙғарыу буйынса ойоштороу комитетының онлайн-ултырышы үтте.**

"2019 йылғы конкурсҡа йомғаҡ яһағанда Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров, конкурстың мөһимлеген баһалап, 2020 йылда уның бүләк фондын 10 тапҡырға арттырырға тәҡдим итте. Был ошо конкурстың әһәмиәтле булыуын йәнә бер тапҡыр раҫлай", - тип билдәләне Ленара Иванова.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова конкурс положениеһындағы үҙгәрештәр хаҡында һөйләне. Әйтәйек, 2020 йылда күберәк ауылдарҙы йәлеп итеү күҙаллана - һәр районда 50 проценттан кәм булмаған тораҡ пункт ҡатнашырға тейеш. Тораҡ пункттарҙы ғәҙел баһалау өсөн конкурсҡа йомғаҡ ауылдарҙы түбәндәге категорияларға бүлеп яһала: халҡы 3 меңдән ашыу; 1-ҙән 3 мең кешегә тиклем; 0 ,2-нән 1 мең кешегә тиклем; 0,2 мең кешенән аҙыраҡ.

Шулай итеп, дүрт категория буйынса 12 еңеүсе билдәләнә. Конкурсты ойоштороу буйынса саралар Башҡортостан Республикаһы Башлығы грантына бойомға ашырыла. "20 июлдән муниципаль этапҡа ғаризалар ҡабул итеү, ә 1 августан "Айыҡ ауыл - 2020" республика конкурсы башлана, шуға бәйле муниципаль этапта күберәк ауылдарҙы йәлеп итеү күҙ уңында тотола", - тип билдәләне Эльвира Айытҡолова.

# ҠАЙҘА ҺУНАР ИТЕРГӘ?

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары тәүге уҡыуҙа "Һунар һәм һунарсылыҡ ресурстарын һаҡлау тураһында" һәм "Йәнлектәр донъяһы тураһында" республика закондарына үҙгәрештәр индерҙе. Улар ярым ирекле шарттарҙа һәм яһалма булдырылған йәшәү мөхитендә һунар итеү үҙенсәлектәрен билдәләй.**

"Документ һунарсылыҡ хужалыҡтарын үҫтереүгә йүнәлтелгән. Маҡсат - махсус шарттар тыуҙырылған, һунар өсөн йәнлектәр үрсетеү буйынса маҡсатлы эш ойошторолған урындарҙа ғына һунар итеү. Был сара биоресурстарҙы һаҡлауға, һунарсылыҡ хужалыҡтарынан ситтә һунар итеүҙе кәметеүгә булышлыҡ итергә тейеш. Европала бындай тәжрибә күптән ҡулланыла, ә беҙҙең илдә һуңғы ваҡытта ғына популярлыҡ яулай башланы", - тине Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Закон проектында ярым ирекле шарттарҙа һәм яһалма булдырылған йәшәү мөхитендә тотолған йәнлектәр донъяһы объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу өлкәһендә хоҡуҡи база билдәләнә. Бынан тыш, ошондай йәнлектәрҙе аулауға лимиттар яңынан ҡарала. Законды көҙгө сессия осоронда ҡабул итеү планлаштырыла.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда "Берҙәм Рәсәй" ирекмәндәре мохтаждарға аҙыҡ-түлек менән булышлыҡ күрһәтеүҙе дауам итә. Сираттағы ярҙам "Хәстәрлек картаһы" проекты сиктәрендә ойошторола. Уға мотлаҡ Бөйөк Ватан һуғышы ҡатнашыусылары һәм инвалидтары, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр, яңғыҙ йәшәгән пенсионерҙар, уҡып йөрөгән етем балалар, аныҡ йәшәр урыны булмағандар, аҙ тәьмин ителгән эшһеҙҙәр һәм ауыр тормош хәлендә ҡалғандар инә. Был юлы 1000 аҙыҡ-түлек йыйылмаһы таратыла.

✓Өфөлә өс йөҙ объектты туристарға күрһәтеү исемлегенә индереү планлаштырыла. Шулар араһында Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 400 йыллығы уңайынан төҙөлгән Дуҫлыҡ монументы, Салауат Юлаев һәйкәле, элекке Коммерция училищеһы (Ленин ур, 61), "Лаптев йорто" (Гоголь ур, 27), "Изге Сергий ҡорамы" (Бехтерев ур, 2) төбәк әһәмиәтендәге мәҙәни мираҫ объекттары һәм башҡалар бар.

✓1 августан рәсәйҙәр газға күберәк түләй башлай. Халыҡ өсөн дә, сәнәғәт өсөн дә тариф яҡынса 3 процентҡа арттырыла. "Интерфакс" мәғлүмәттәре буйынса, газға хаҡты арттырыу 2020 йылдың апрелендә үк планлаштырылған. 1 июлдән тариф планына үҙгәрештәр индерелергә тейеш булған, ләкин бойороҡто әҙерләү оҙаҡҡа һуҙылған. Ике йыл элек илдә ошондай хәл күҙәтелде: ул саҡта газға түләүҙе арттырыу 21 августа көсөнә инде.

✓Башҡортостан Хөкүмәте президиумы ултырышында табиптарға - COVID-19 менән эшләгән шәхси ойошмалар хеҙмәткәрҙәренә федераль бюджеттан субсидия түләү тәртибе раҫланды. Поликлиника табиптарына - 80 процент, поликлиникаларҙың кесе медицина персоналына - 20 процент; стационар табиптарына - 100 процент; стационарҙарҙың урта медицина персоналына - 50 процент; стационарҙарҙың кесе медицина персоналына - 30 процент. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, 2020 йылдың майы өсөн - 8 222 медицина хеҙмәткәре, ә июнь өсөн 6 910 кеше аҡса алған.

✓Өфө рәссамдары Олег Кайбышев һәм Мансур Зияев Башҡортостандың баш ҡалаһына тағы бер мега-граффити бүләк итергә йыйына. Транспорт урамындағы 48/2 йортонда тиҙҙән Советтар Союзы Геройы Георгий Мушниковтың портреты төшөрөлә. Летчик Мушников һуғыш йылдарында Ил-2 штурмовигында 185 хәрби осош яһаған. 1962 йылдан алып 20 йыл буйына моторҙар эшләү заводында техник контроль хеҙмәтендә эшләгән.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ҺЫНАУҘАР, ИМТИХАНДАР...

**Коронавирус сигенергә уйламаһа ла, тормош үҙ йыйы менән дауам итә: төҙөлөштәр бара, юлдар һәм ихаталар ремонтлана, төҙөкләндереү эштәре дауам итә. Бизнес һәм эшҡыуарлыҡ ҡына ауырлыҡтар кисерә, әммә дәүләт тарафынан уларға ла төрлө яҡлап ярҙам ителә. Өфө ҡала хакимиәтенең сираттағы онлайн-кәңәшмәһендә лә күптән түгел республикала булып үткән эшҡыуарлыҡты яҡлау буйынса халыҡ-ара форум тураһында һүҙ булды. Был хаҡта ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Николай Фадеев һөйләне.**

Сараны Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, РФ Президенты ҡарамағындағы эшҡыуарҙар хоҡуҡын яҡлау буйынса уполномоченный институты ойоштора. Төп фекер алышыу темаһы булып илдә бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеү саралары тора һәм форум барышында, көрсөк осоро булыуға ҡарамаҫтан, республикала социаль-иҡтисади үҫеш темптарының артыуы билдәләнә. Форум һуңында Башҡортостан Республикаһы эшҡыуарҙары өсөн Ленин урамы, 5/3 адресы буйынса Йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһе һәм эшҡыуарҙарҙың хоҡуҡын яҡлау буйынса уполномоченныйҙың яңы офисы асыла.

Мәғлүм булыуынса, йыл һайын июлдән торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн хаҡ арта. Ә бына хаҡ артҡанға тиклем халыҡ ошо хеҙмәттәр өсөн түләүҙәрҙе нисек тормошҡа ашыра икән? Был хаҡта ЕРКЦ МУП-ының генераль директоры Айгөл Винникова бәйән итте. Билдәләнеүенсә, йылдың тәүге яртыһында 5 миллиард 032 миллион һум түләүҙәр иҫәпләнһә, 4 миллиард 969 миллион һумы йыйылған. Шулай ҙа бурыстар ҙа йыйыла һәм йыл һайын арта бара. Айгөл Винникова белдереүенсә, коронавирус таралыуы осоронда 2021 йылдың 1 ғинуарына тиклем торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләмәүселәргә штраф һәм пеня өҫтәүгә мораторий индерелгән. Әммә ул бетөнләй түләмәҫкә була, тигәнде аңлатмай. Әгәр ошо ваҡыт үтеү менән граждандың бурысы ҡала икән, пеня тулы күләмдә өҫтәләсәк.

Шулай уҡ кәңәшмәлә йылдың беренсе яртыһында күп фатирлы йорттарҙа газ ҡорамалдарын хәүефһеҙ ҡулланыу буйынса "Газпром газ бүлеү" асыҡ акционерҙар йәмғиәте филиалы директоры Илфир Мөләков сығыш яһаны. Мәғлүм булыуынса, йыл һайын газ ҡорамалдары өҙөкһөҙ һәм хәүефһеҙ эшләһен өсөн комплекслы саралар, шул иҫәптән техник хеҙмәтләндереү, йорт эсендәге һәм фатир эсендәге газ ҡорамалдарын ремонтлау, авария-диспетчер тәьминәте, техник диагностика һәм ҡорамалдарҙы алыштырыу эштәре башҡарыла. Әгәр техник хеҙмәтләндереү буйынса килешеү, техник диагностикалау буйынса ыңғай һығымталар юҡ икән, газ бүлеү ойошмаһы йорттарға газ биреүҙе туҡтата ала. Шуның өсөн, бындай эштәрҙе йәйге миҙгелдә башҡарып ҡалыу яҡшыраҡ.

Уҡыусыларҙың Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыуы барышы менән Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазова таныштырҙы. Был кампания башынан алып барлығы 13 фән буйынса имтихан бирелгән. 17 июлдә тәүге - 3 июлдәге имтихан һөҙөмтәләре билдәле булған. Быйыл әҙәбиәт һәм география буйынса уртаса балл күтәрелһә, информатика буйынса бер аҙ төшкән. 7 кеше имтихандарҙы - 100 балға, 273-ө - юғары баһаға тапшырған. 22-23 июлдә сығарылыш синыфы уҡыусылары инглиз теленән имтихан бирҙе. Ә 24 июлдән 8 августа тиклем буласаҡ абитуриенттарҙы резерв көндәре көтә.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# РУЛДӘГЕЛӘРГӘ ҠАҒЫЛА



**1 июлдән Рәсәйҙә автомобилистар өсөн өс мөһим яңылыҡ индерелде.**

Уның береһе руле уң яҡта булған машиналарға ҡағыла. Бындай автомобилдәрҙе илгә индереү, уларҙы иҫәпкә ҡуйыу һәм эксплуатациялау ҡатмарлаша. Был яңылыҡ 2020 йылдың 1 июленән Рәсәйгә индерелгән М2 һәм М3 категорияһына ҡараған техникалар, атап әйткәндә, самосвалдар, төҙөләш техникаһы, шулай уҡ микроавтобустар, манипуляторлы йөк машиналары, пассажир автобустарына ҡағыла.

Икенсе яңылыҡ машина төҙөлөшөнә үҙгәреш индереү ҡағиҙәһенә бәйле, йәғни хәҙер двигателдә газ яғыулығына күсереү, багажник, лебедка һәм фаркоп ҡуйыу махсус лаборатория аша ғына мөмкин. Быға тиклем кәрәкле документ фотография буйынса бирелә ине. Июлдән водителдәр тюнинг эшләнгән автомобилдәрен мотлаҡ лабораторияла тикшертергә тейеш.

Өсөнсө үҙгәреш водитель танытмаһын алыу йәки уның ваҡытын оҙайтыу өсөн медицина тикшереүен үтеүгә ҡағылышлы. Врач-наркологтың шиге булған осраҡта хәҙер кәрәкле белешмә алыу өсөн водителдәргә өҫтәмә анализ тапшырыу мөһим. Быға тиклем Һаулыҡ һаҡлау министрлығы бындай тикшереүҙе танытма алырға теләгән һәр кем үтергә тейеш тип планлаштырғайны. Әммә былтыр ноябрҙә бөтә илдә, шул иҫәптән Башҡортостанда наркология диспансерҙарына оҙон сират барлыҡҡа килеүе сәбәпле, медицина тикшереүе үтеүҙең яңы тәртибен индереү әлегә кисектерелә.

КӨНАУАЗ




# ЮЛ КҮРҺӘТКЕСТӘРЕ...

## өс телдә булһын

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса республиканың Туризм буйынса дәүләт комитеты туристар навигацияһы билдәләрен һәм күрһәткестәрен ҡуйыу буйынса эш алып бара.**

Был билдәләр, күрһәткестәр туристарҙы Башҡортостандың иҫтәлекле урындарына, тәбиғәт һәм археология ҡомартҡыларына, музейҙарға һәм һәйкәлдәргә йүнәлтәсәк. Улар федераль, төбәк, муниципаль-ара һәм урындағы юлдарҙа ҡуйыла. Шулай итеп, быйыл 30 августа тиклем төбәктә йәмғеһе 1500 билдә ҡуйылыу планлаштырыла. Әлеге ваҡытта был эш Өфөлә һәм Бөрөлә әүҙем алып барыла. Ошондай уҡ күрһәткестәр республиканың барлыҡ төбәктәрендә лә барлыҡҡа киләсәк. Туристик навигация билдәләре Р57581-2017 дәүләт стандарттары буйынса әҙерләнә һәм туризм өлкәһендәге мәғлүмәт билдәләре дөйөм талаптарына яуап бирә. Билдәләрҙә, күрһәткестәрҙә эшләгәндә аҡ-һоро төҫтәр һәм айырым шрифт файҙаланылған. Туристик йәһәттән үҫешкән илдәрҙә тап ошондай билдәләр файҙаланыла. Федераль һәм төбәк тәғәйенләнешле юлдарҙа ҡуйылған билдәләрҙең исеме рус һәм инглиз телдәрендә яҙылған. Күрһәткестәрҙә шулай уҡ кәрәкле урынға тиклем арауыҡ билдәләнгән. Был иһә беҙгә донъяның төрлө мөйөшөнән килгәндәргә мәғлүмәтте тиҙ аңларға ярҙам итәсәк. Башҡорт телендәге мәғлүмәтте иһә объекттарҙың үҙендә ҡуйыу тәҡдим ителә.

Был яңылыҡ буйынса Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ошо арала үткән сираттағы ултырышында ла фекер алышыны. Башҡортостанда туристик юл күрһәткестәре өс - рус, башҡорт һәм инглиз телендә булырға тейеш, тинеләр Башҡарма комитет ағзалары. Был тәҡдим республиканың Туризм буйынса дәүләт комитетына ебәреләсәк, тине Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова. Ул шундай миҫал да килтерҙе: Башҡорт мәғрифәтсеһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың Ҡырмыҫҡалы районындағы музейына күрһәткес тә ике - рус, инглиз телдәрендә яҙылған, ә башҡорт телендә мәғлүмәт юҡ. Быйыл республикала иғлан ителгән Башҡорт теле йылында терминология һәм топонимия комиссиялары эшмәкәрлеген ошо мәсьәләгә йүнәлтеү маҡсатҡа ярашлы булыр ине, тип билдәләне Эльвира Ринат ҡыҙы.

Билдәле яҙыусы һәм ғалим-энциклопедист Рәшит Шәкүр топонимик атамаларҙың башҡорт теленә тәржемәһе бик йыш хаталы булыуын белдерҙе. Элекке йылдарҙағы кеүек, предприятиеларҙың рус һәм башҡорт телендәге атамалары тупланған исемлек сығарырға кәрәк. Электрон һәм ҡағыҙ варианттағы бындай баҫма республика райондары һәм ҡалаларына ҙур ярҙам булыр ине. "Башнедра"ның элекке башлығы, Ҡоролтай Башҡарма комитетының комиссия ағзаһы Рәсих Хәмитов туристик атамаларҙы башҡортса яҙғанда уларҙың боронғо исемен һаҡларға кәрәклеген белдерҙе. Мәҫәлән, Белорет районындағы "Инзерские зубчатки" башҡортса Иректаш була, әммә уның икенсе төрлө тәржемә ителгән күрһәткесе ҡуйылған да инде.

**Әйткәндәй, гәзит уҡыусыларыбыҙҙы республика райондары һәм ҡалалары хакимиәттәре эргәһендәге терминология комиссиялары, шулай уҡ беҙгә, "Киске Өфө" гәзите редакцияһына алтаҡталарҙағы, тораҡ билләмәләре, ер-һыу һәм башҡа атамаларҙағы хаталар тураһында хәбәр итеүегеҙҙе, фотоға төшөрөп ебәреүегеҙҙе үтенәбеҙ.**

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Бөйөрҙә ҡом булһа

❖ Бер балғалаҡ етен орлоғона бер стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Ҡайнағандан һуң тағы 5 минут утта тоторға. Ҡайнатма һыуынғас һөҙөргә, аҙ ғына ҡайнаған һыу өҫтәп ҡойорға. Ике көн дауамында һәр ике сәғәт һайын 1/3 стакан итеп эсергә. Бер аҙнаға дауаланыуҙы туҡтатып торорға һәм кәрәк булғанда, тағы ҡабатларға.

## Бронхит

❖ Ҡурай еләге һабаҡтарын 3-4 см оҙонлокта һындырып алып, 2 усын эмалле һауытҡа һалырға һәм 1 литр һыуыҡ һыу өҫтәргә. Ҡайнап сыҡҡас тағы ла 10-15 минут талғын утта торорға һәм һүндерергә, 1 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне 7-10 көн дауамында көнөнә 3 тапҡыр бал ҡушып яртышар стакан эсергә. Ҡаты йүтәлләгән осраҡта ике аҙна дауамында дауаланырға. Был дауаны балаларға ла ҡулланырға ярай, әммә көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан миҡдарҙа ғына эсерергә була.

## Эҫәлә баш ауырыһа

Йәйге эҫәлә баш ауырыуы бар, ә аҙналар буйы ҡояш ҡыҙҙырғанда гел дарыуҙар ашап булмай. Был осраҡта бер нисә төнәтмә яһап эсеү ярҙам итер.

❖ 1 ҡалаҡ укроп сәскәлегенә 1,5 стакан ҡайнар һыу ҡойоп бешерергә, көн дауамында эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ йүкә сәскәһен 1 стакан һыуға һалып 10 минут ҡайнатып алырға һәм төнгөләккә эсергә кәрәк.

❖ 1 балғалаҡ киптерелгән розмаринға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут төнәтеп һөҙөргә һәм сәй итеп эсергә.

❖ 20-шәр грамм гөлбаҙран (пижма), йүкә сәскәһе, мелисса үләнен ҡушырға. Ҡатышманың 2 ҡалағына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне 2-гә бүлеп, ашағандан 2 сәғәт үткәс һәм йоҡлар алдынан эсергә (көнөнә 2 тапҡыр).

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

**✓ - Иртән йоҡонан уянғанда үҙеңдең, яҡындарыңдың иҫәнлегенә ҡыуана, иртәнге ҡояштың тәүге нурҙары матурлығын күрә, һоҡлана белеү - үҙе бер бәхет. Тап бына ошоларҙан башлана ла инде эшеңдең уңышы.**



ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Ҡатын-ҡыҙҙар кейеме составында һарауыстар тәғәйенләнешенә ярашлы ҡулланылыштан иртә төшөп ҡалһа ла, XIX быуатта зиннәтле бүләк рәүешендә таҫтарҙарға ҡарағанда киңерәк территорияла таралған булған. С.И. Руденко һарауыстарҙы Урал аръяғының көнсығышында ғына түгел, тау һәм тау аръяғы башҡорттарында: тау ҡатайҙарында, бөрйән, гәрәй-ҡыпсаҡ, ҡарағай-ҡыпсаҡ һ.б. ла осратҡан. Шулай уҡ Өфө һәм Санкт-Петербург музейҙары һарауыстарҙың күпселеге Ҡурған (100-ҙән ашыу) һәм Силәбе (50 дана) өлкәләре ауылдарынан йыйып алынған. Мөхәмәтҡолой һәм Мәтәл ауылдарының (Силәбе өлкәһе) 10-дан ашыу һарауысы Будапешт ҡалаһында Венгрия этнография музейында һаҡлана.

Башҡорттарҙың хисаплы ҡайыуы килеп сығышын асыҡлау йәһәтенән ошо әйберҙәрҙең боронғо үрнәктәре айырыуса әһәмиәтле. Таҫтар-һарауыс комплексына С.И. Руденко, һуңыраҡ Н.В. Бикбулатовтың да ғилми хеҙмәттәрендә урын бирелә. Хисаплы ҡайыу орнаменттарына Е.Е. Никонорованың китабы арналған, таҫтар һәм һарауыстар унда төп урын биләй.

Таҫтар һәм һарауыстарҙы биҙәү стилдәре оҡшашлығын билдәләһәләр ҙә, тикшеренеүселәр башҡарыу алымы, төп һүрәтләү элементтары һәм орнаменттар төҙөлөшөндә айырмалыҡтар булыуын билдәләй.

Тар ғына һарауыстарҙа орнамент трапеция сиктәрендә тупланған. С.И. Руденко 13 орнаменталь мотив төрөн атап әйтә, улар үҙгәртелеберәк эшләнеп иҫ киткес күп төрлө нағыштар барлыҡҡа килтергән. Улар йондоҙсоҡ, шыршы - тешле һыҙыҡтар, ҡыя шаҡмаҡ, өсмөйөш, эске өлөшө деталдәргә бүлеп тултырылған шаҡмаҡ, тура һәм ҡыя сатраштар һ.б. элементтарҙан торған. Уртала ағас, уның эргәһендә ҡапма-ҡаршы торған ҡоштар, аттар, боландар һүрәтләнгән композициялар айырылып торған. Һирәк осраҡта, күпселеген Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында һарауыстар нағышында һыҙаттар һәм көкерсәктәрҙән йәки өсмөйөштәр теҙмәһенән торған һыҙыҡ биҙәктәр (линейные узоры) осраған, ғәҙәттә, улар шыма нағыш ярҙамында сигелгән. Бындай биҙәк ҡорама әйберҙәрҙә хәтерләтә.

Ҡайһы бер музей ҡомартҡыларының ҡыҫҡа һүрәтләмәһе таҫтарҙарҙы күҙ алдына килтерергә ярҙам итә. Ҡурған өлкәһенең Сафаҡул районы Оло Солтан ауылынан алынған таҫтар (РЭМ, кол. 2881-403) остарында һыҙатлы биҙәк ҡарағусҡыл ҡыҙыл, йәшел, аҡһыл көрән (беж), ҡара алһыу-зәңгәр (темно-лиловый) һәм алтын төҫлө ебәктән сигелгән. Шыма нағыш һыҙаты селтәр ("по выдергу") менән берләшеп килә. Юламан ауылынан (Әлмән районы) алынған аҡ киндер таҫтар алһыу, ҡарағусҡыл ҡыҙыл, көрән, аҡһыл көрән, йәшел төҫтәрҙән торған нәзәкәтле нағыш менән биҙәлгән. Хисаплы шыма нағыш ярҙамында эшләнгән биҙәктең ситтәре ҡара менән уратылған һәм мережка (арҡаү ептәрен һурып алып, туҡымаға яһалған биҙәкле селтәр) менән тулыландырылған. Нағыш һыҙаттары араһында ҡуйы ҡыҙыл төҫтәге таҫма һалынған (РЭМ, кол. 2881-372).

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ЕТМЕШ ЕТЕ ҺӨНӘРЛЕ...

# ХЫЯЛДАРЫ...

## ижадҡа әйҙәй ҙә тора



**Мәләүез районы Дәүләтҡол ауылы - Башҡортостандың бай тарихлы, күренекле шәхестәре, уңған хеҙмәтсәндәре менән дан тотҡан тораҡ пункттарының береһе. Күренекле яҙыусы Булат Рафиҡовтың тарихи романдары, фараздары ошо ерлектә тыуғанғамы, әллә район үҙәгенән ярайһы ситтә урынлашып, төпкөл төбәк иҫәпләнгәнгәме, ошо ҙур булмаған ауылға килеп инеү менән ниндәйҙер күҙгә күренмәгән ептәр уратып ала ла, һине сал быуаттар артылышына әйҙәй кеүек...**

Тап бына ошо ҡаланан йыраҡта ултырыуын, ауылдаштарының, килгән ҡунаҡтарҙың барыр урыны булмауын иҫәпкә алып, ауылдың оҫта ҡуллы уҙаманы Ғәйнулла Рахманголов тыуған төйәгендә тарихи ҡоролмалар, һәйкәлдәр эшләргә ниәт иткән дә инде. Бынан биш йыл элек ул Енеүҙең 70 йыллығына, һуғышта ҡатнашҡан етмештән ашыу ауылдашы иҫтәлегенә арнап, фашист илбаҫарҙарын тар-мар итеүҙә ҙур роль уйнаған самолет һынын эшләп, йорто янындағы бағанаға беркеткән. Тәүҙәрәк оҫтаға төрлө фекерҙәр ишетергә тура килә, әлбиттә. Әммә тиҙҙән елгә зыр әйләнгән "тимер ҡош" ауылдаштарының яратҡан урынына әүерелә.

Ауыл ҡаршыһындағы тауҙа уның тағы бер нисә ижад емеше урынлашҡан. Бөйөк шәхесебеҙ Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулған йылда уға арнап Ғәйнулла ағай тимерҙән һәйкәл эшләгән. Батыр һыны бында ла, баш ҡалабыҙҙың Ағиҙел ярындағы кеүек, халҡыбыҙҙың азатлыҡҡа ынтылышын сағылдырып баҫып тора. Уның янына шулай уҡ Крәҫтиәндәр һуғышында файҙаланылған пушка макеты ҡуйылған. Унан йыраҡ түгел ете тажлы ҡурай сәскәһенең һабағы урынлаштырылған һәм уға Башҡортостан һәм Рәсәйҙең дәүләт флагтары беркетелгән. Былтыр ауыл байрамына әҙерләнгән ваҡытта оҫта "Яратам һине, Ҡарағай" (ауылдың икенсе исеме) мәғәнәһе һалынған йөрәк һынын яһап ҡуйған.

Яҡташтарының, Дәүләтҡолға килгән ҡунаҡтарҙың үҙе ҡорған ҡоролмалар, һындар янында фотоға төшкәндәрен күрһә, тарихи ҡиммәткә эйә булған һәйкәлдәр менән ҡыҙыҡһыныуын белһә, автор ысын мәғәнәһендә ҡыуаныс кисерә, башҡарған эшенән икеләтә йәм таба. Тау битләүендә шундай мемориалдар урынлаштырыу уҙамандың ҡапыл ғына тыуған теләге түгел. Был хаҡта ул йәштән хыялланған. Быйыл Ғәйнулла ағай Бөйөк Енеүҙең 75 йыллығы айҡанлы легендар Т-34 совет танкыһы макетын эшләгән. Уны төҙөүгә бер аҙна сарыф иткән. Легендар хәрби техника макеты бөгөн оҫтаның йорто алдында тора. Ауылдаштары ғына түгел, ситтән килеп күреүселәр ҙә күп.

- Дүрт көн иртәнән кискә тиклем баш та күтәрмәй эшләгәнемдә күреп, йәмәғәтем, баҡсала ла шулай эшләһәң ине, тип мәрәкәләп тә бөттө. Буяу, саморез һәм башҡа ваҡтөйәктән тыш, бер нәмә лә һатып алманым. Ҡалғаны - төҙөлөштән артып ҡалған ҡул аҫтындағы материал, - ти Ғәйнулла ағай.

Ул фронтовик улы. Атаһы Зәйнулла Рахманғолов үҙ заманының оҫта гармунсыһы, Ржев ҡалаһы янындағы ҡаты һуғышта ҡатнаша. Яраланып ҡайтып, бер аҙ шәбәйгәс, ун балалы ҙур ғаиләнең ҡалдырып, тағы яу ҡырына юллана. Сабыйҙары бәхетенә яугирға иҫән-һау әйләнеп ҡайтырға насип була. Тыуған колхозын күтәреүгә индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ уның.

Мәҡәләбеҙ геройының да эшләмәгән эше юҡ: водитель дә, мал ҡараусы ла, почтальон да, монтажлаусы ла ул. Вахта ысулы менән сит тарафта ла эшләргә тура килә уға. Ҡайҙа ғына тир түкһә лә, һәр ваҡыт алдынғылар сафында, фотоһүрәте Маҡтау таҡтаһынан төшмәй. Оло маҡсаттар менән йәшәгәнгә тормош ваҡлыҡтарынан өҫтөн ул. Ижади булмышына ла тоғро ҡалған Ғәйнулла ағай. Хаҡлы ялда ла ҡул ҡаушырып ултыра торғандарҙан түгел. Әлеге ваҡытта Ырымбур - Өфө трассаһын ремонтлаған ойошмала ҡарауылсы. Ике йыл тирәһе ауыл старостаһы дилбегәһен дә тарта. Гармуны менән төрлө кимәлдәге конкурстарҙа ла осратырға тура килә уны. Саҡ ҡына буш ваҡыты сыҡһа, ҡулына инструменттарын ала. Шуға ла оҫтаның йорт-ихатаһы үҙенсәлекле милли биҙәктәре менән айырыла. Башҡорт тирмәһенә оҡшатып һалған яңы йорто ла килгән кешеләрҙең иғтибарын әллә ҡайҙан йәлеп итә. Ошондай тынғыһыҙ ижад дәртле кеше менән әңгәмәбеҙ уның шундай һүҙҙәре менән тамамланды:

- Иртән йоҡонан уянғанда үҙеңдең, яҡындарыңдың иҫәнлегенә ҡыуана, иртәнге ҡояштың тәүге нурҙары матурлығын күрә, һоҡлана белеү - үҙе бер бәхет. Тап бына ошоларҙан башлана ла инде яңы тыуған көндөң, башлаған эшеңдең уңышы. Мин бер ҡасан да шуны онотмаҡым: ниндәй генә заманда йәшәмәһен, ҡайҙа ғына йөрөмәһен, һәр кем үҙенең, атай-олатайҙарының, халҡының үткәнен онотмаҫҡа тейеш. Тарихын белгән милләттең генә киләсәге өмөтлө...

**Лена БАРЫЕВА.**

ХӘТЕРЛӘП...

# БЕСӘН МӘЛЕ

**Йәй эштең иң күп сағы, тиһәм, башҡа миҙгелдәр үпкәләр инде, сөнки ауылда эштең әҙ сағы юҡ. Бер яҡтан, еләге бешеп тамшандырһа, икенсе яҡтан, йүкә сәскәһе, мине йыймай ҡалмағыҙ, тип илерткес хуш еҫен тарата. Бесәне лә өлгөрҙөм, бештем, көйө башлауым бар, тип ашыҡтыра...**

Ауыл халҡының иңенә мотлаҡ үтәлергә тейешле оло бер бурыс булып яткан бесән әҙерләү. Был эш минә бәләкәйҙән таныш. Ҡулға ҙур ағас тырма тотторып, өләсәйемдең бесәнлегенә алып баралар ине. Хәлдән килгәнсе баҡуй әйләндерәбеҙ, күтәремләйбеҙ. Тәртип ҡаты, бәләкәс тип йәлләп тормайҙар. Бер урындан икенсе урынға күскәндә тырманы күтәреп йөрөмәйһең. Ергә һалып тырматып бараһың. "Бер күтәреп һалырлыҡ бесән әләгә ул", - ти торғайнылар. Ысынлап та, тырмаға әләгеп апарыҡ бесән йыйыла ине.

Атайым колхоз эшенән бушамай. Әсәйем менән икәүләп күрән бесәнен эшләшергә китәләр. Ул инде беҙҙең ауылға яҡын, Наҡаҫ буйында ғына. Улар менән гәүләтеп бесән күбәләйбеҙ. Мине күбә тапарға мендерәләр. Тапап-тапап бейек итеп өйәбеҙ. Эш бөткәс, арбаға тейәлешеп ҡайтырға сығабыҙ. Эй, шул мәлдә ярата инем.

Ә беҙҙең ауылда берәүҙең дә үҙенең генә бесәнлеге булманы. Колхоздыҡы бөткәс, бөтә ауылға дөйөм бесәнлек бирәләр. Һәр ғаиләнән бер кеше барырға тейеш. Ғәм халыҡ бергә бесән эшләй. Туғай буйҙарын буйҙан-буйға сабып төшеп китәләр. Кем һәнәк, кем тырма менән эшләй. Башлыса ҡатын- ҡыҙ күтәремләй, ир-егет күбә күтәрә. Ҙурайғасыраҡ, атап әйткәндә 10-11 йәштәрҙә, минә лә әләкте шулай бесән эшләү. Атайым менән әсәйем үҙҙәре бара алмағас, мине ебәрҙеләр. Аҙаҡҡы көн булған икән. Ярты көн эшләгәс, бесән күбәләнеп бөттө. Шунан йәрәбә һалып, уны бүлештеләр. Һәр кем үҙенекенә тамға һалды. Берәүҙәр муйыл, икенселәр ерек ботағы ҡыҫтырҙы. Өйҙән сепрәк алып килеп, таяҡ ҡыҫтырып, шунда бәйләнеләр. 90-сы йылдар аҙағында ғына күмәк эшләү, колхоздыҡы бөткәс кенә сабырға төшөү тигән нәмә бөттө. Кеше иркенләп, ҡасан теләй, шунда эшләй башланы.

Кеше иркенләне, тейеүем дә бик үк дөрөҫ түгелдер. Беҙҙә мал-тыуарҙы күпләп аҫрағас, сабынлыҡ етмәй аптырата. Малды ҡышын көр сығарыр өсөн иһә аҙыҡ мул кәрәк. Әлдә генә Ырымбур өлкәһенең Алмалы ауылы яғы бар. Беҙҙең ауылдар шул яҡты сабып кинәнә. Бесән етерлек булһа, йоҡоң да тыныс, ашың да тәмле. Ул ғына түгел, бесән мәлендә күмәк хеҙмәт, үҙ-ара ярҙамлашыу, аралашыу кеүек матур йолабыҙҙы иҫкә төшөрәбеҙ. Шуныһы бигерәк ҡиммәт беҙҙең өсөн.

**Фирүзә ХӨСӘЙЕНОВА-ӘБДРӘХИМОВА.**
**Күгәрсен районы.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

9

# Ғаиләм - ҡәлғәм

25-31 ИЮЛЬ (майай) 2020 йыл №30 (916)

УЙЛЫҒА - УЙ

# ТУҒАНДАРЫҢ - ҠУЛЫҢ МЕНӘН АЯҒЫҢ,

## дуҫтарың - таяныр таяғың

**"Ғаиләм - ҡәлғәм" тигән һүҙҙәргә ҙур мәғәнә һалынған. Ғаилә - ул кеше тормошоноң төп таянысы, үҙенең ағзаларын яҡлаусы, юғары баһа менән тәьмин итеүсе социаль төркөм. Үҙенең ҡанундары, йолалары, традициялары булған бәләкәй генә дәүләт. Шуға иғтибар иткәнегеҙ барҙыр: йәмғиәттең ошо бәләкәй генә ячейкаһында, йәғни ойошмаһында ҡәрҙәшлек ептәре, татыулыҡ хисе ни тиклем көслө булһа, уның вәкилдәре лә шул тиклем бәхетле һәм уңышлы була. Бөгөнгө етеҙ үҙгәреп торған заман, һис шикһеҙ, туғанлыҡ хистәренә лә йоғонто яһамай ҡалмай. Ғаилә мөнәсәбәттәре, мәңгелек ҡиммәттәр үҙгәреш кисергән бөгөнгө мәлдә һеҙҙең ғаиләлә туғанлыҡ мөнәсәбәттәре бармы? Туғанлыҡ ептәрен нығытыуҙың ниндәй сараларын беләһегеҙ? Ошо һорау менән бер нисә замандашыбыҙға мөрәжәғәт иттек.**



***Әминә ҠАСИМОВА, Өфө ҡалаһы:*** Күп балалы ғаиләләрҙә үҫкәндәр ундағы балаларҙың ике йәки өс төркөмгә бүленә икәнен беләләр. Олалар бер быуын, бәләкәйерәктәре икенсе быуын булып үҫә. Бына, мәҫәлән, беҙ туғыҙ бала үҫтек һәм ике төркөмгә бүлендек. Минең менән өлкәндәр төркөмө тамамлана, һеңлем менән кесеһе башлана. Мин күберәк өлкәндәр менән аралашам, ә һылыуым - бәләкәйерәктәре менән.

Бөгөнгө аҡылым менән мин күп балалы ауыл ғаиләһендә ниндәй тәрбиә һәм мөнәсәбәт алғанымды баһалайым һәм ҡәнәғәт ҡалам.

Ҡыҙ бала булараҡ, мин иң беренсе сиратта ағайҙарымдан һөйөү алғанмын. Уларҙың йәлләп, ҡурсалап, маҡтап, һоҡланып ҡараған ҡараштарын тойоп, яҡшы һүҙҙәрен ишетеп үҫкәнмен. Был миңә тормошҡа ҡыйыу һәм ышаныслы ҡарарға ярҙам итте. Мин был йылылыҡты ситтәрҙән эҙләмәнем, көслө заттың иғтибарына мохтаж булманым, сөнки ул ғаиләбеҙҙә бар ине. Һуңынан, яңғыҙ ҡалып йәшәргә тура килгәндә лә, балаларҙың мөһим хәл-ваҡиғаларында ла ағайҙарымдың ярҙамын тойҙом. Туранан-тура матди ярҙам булһынмы, һүҙ-кәңәшме, психологик ярҙаммы - булды, алдым.

Ошондай яуаплы мәлдәрҙә туғанлыҡтың ҡалҡып сығыуы һәм ир-егеттәрҙең терәлергә иңен ҡуя белеүе, моғайын, ата-әсә тәрбиәһелер. Әсәйем ғаиләлә беребеҙҙә берәй хәсрәт булһа, башҡаларҙы уға йүнәлтә, барығыҙ, күрегеҙ, күңелен бушатығыҙ, тип өйрәтеп ебәрә ине. "Ағай-эне талаша, атҡа менһә яраша" тип, үҙ-ара сыйышып киткәндәрҙе лә татыулашыуға, оҙаҡ үпкә тотмауға өндәй ине. Бөгөн шул ҡанундарҙы оло ағай менән еңгәй алған. Һәм ана шул ололарға буйһоноу, уларҙың һүҙен йыҡмаҫҡа тырышыу һаҡланған.

Ошо матур ғәҙәттәрҙе үҙемдең балаларыма ла һалып ҡалдырғым килә. "Һеҙ был донъяла иң яҡын кешеләр, кеше ирен дә, ҡатынын да, дуҫын да алмаштыра, яңырта ала, ә бер туғанды булмай, шунлыҡтан бер-берегеҙгә тоғро, терәк һәм яҡын булығыҙ", тим. Туғанлыҡ - ул ашап-эсеү, бергә йырлашып ултырыу ғына түгел, ул эске бәйләнешле булыу, бер-береңде тоя, аяй, йәлләй, аңлай белеү. Ҡан берлеген ихтирам итеү.

Мине ошо тәңгәлдә көнсығыш халҡының туғанлыҡты юғары ҡуйыуы һоҡландыра. Бер туғандарҙың бер-береһенә өҙөлөп тороуы, финанс мәсьәләләрҙе намыҫлы сисә белеүе, ир балаларҙың ҡыҙ балалар өсөн яуаплылыҡ алыуы, ата-әсәләрен ҡарауҙы бер сауап итеп ҡабул итеүҙәре беҙҙең өсөн үрнәк алырлыҡ күренештәр ул. Күп мөнсәбәттәр һәм йолалар ireклегә әйләнгән кеүек, беҙҙә лә туғанлыҡ шарттары артыҡ йомшап, бушап китте. Айҙар буйына аралашмау, күрешмәү, йә талашып ара боҙоу ғәҙәтигә әйләнде. Ә бит асылда бер туғаның иң яҡын кешең, һәм уның менән һин имсәк һөтө, әсә ҡарыны, атай ҡаны кеүек изгеләрҙән-изге төшөнсәләр менән бәйле булыуыңды һәм быларҙы боҙоу оло гонаһ икәнде һәр бала һеңдереп үҫергә тейеш. Был уға йәшәүҙә еңеллек, ышаныс һәм көс кенә бирәсәк.

***Гүзәл КӘРИМОВА, Мәләүез ҡалаһы:*** Һигеҙ балалы ҙур ғаиләлә үҫтем. Бала саҡтан уҡ беҙгә эш һөйөү, кешеләргә ярҙам итеү, бер-береңә ихтирамлы мөнәсәбәт менән бергә татыулыҡ тойғоһон, туғанлыҡ хисен дә тәрбиәләнеләр. Ағастың тамыры ни хәтлем ныҡлы булһа, олоно ла ҡеүәтле. Кеше лә шуның һымаҡ: туғандары менән көслө. Был хәҡиҡәтте тормошомдоң төрлө осоронда күп һынаным. Быны апайым, һылыуҙарым, ҡустым да раҫлар, тип уйлайым. Ололарыбыҙ үҫә торҙо, бәләкәйҙәренә юл яра барҙы. Барыбыҙ ҙа мәктәптә яҡшы уҡыны, әммә кәңәш итеүсе булмағанғамы, өлкәнерәктәребеҙ урта һөнәри белем биреү учреждениеларын ғына тамамланы. Уның ҡарауы, үҙебеҙҙән кесерәктәр юғары уҡыу йортона ингәндә ярҙам итә алдыҡ. Үҙебеҙҙең, һуңынан балаларыбыҙҙың туйҙарын дөйөм көс менән үткәрҙек. Бер-беребеҙгә йорт күтәргәндә лә, ремонт-фәлән ваҡытында ла, баҡса мәшәҡәттәре осоронда ла бер ниндәй саҡырыуһыҙ һәр кем үҙ теләге менән килә, ҡулынан килгәнсә кәңәше, эше менән дә, финанс яҡтан да ярҙам итә.

Тыуған йорт нигеҙен яңыртып, әсәйебеҙ менән бергә тырышып донъя көткән ҡустыбыҙға, киленебеҙгә лә рәхмәт кенә әйтәбеҙ. Тап улар беҙҙе һәм утыҙға яҡын ейән-ейәнсәрҙе, бүлә-бүләсәрҙе туплап тора. Ғаилә байрамдарын, ҡаҙ өмәләрен, һуғым һуйыу кеүек йолауи сараларҙы тыуған нигеҙҙә үткәрергә тырышабыҙ. Был - беҙҙең ғаиләнең яҙылмаған ҡануны. Шуға күрә беҙҙең икенсе яртыларыбыҙ ҙа, балаларыбыҙ ҙа уны аңлай һәм беҙҙең матур ғәҙәттәрҙе дауам итә.

Үҙенең яҡындарына зарланған кешеләрҙе ишеткәнем бар. Яңыраҡ бер танышым һеңлеләренең тыуған йортто һатып, аҡсаһын бүлешеп алырға даулашып йөрөүе тураһында һөйләп торғайны. Юҡ, мин уның һылыуҙарына түгел, иң беренсе, үҙенә ғәжәп иттем. Ни өсөн ул, үҙе ағай булараҡ, үҙенән кесе туғандарына аҡыллы ир һүҙе әйтә алмай һәм был хаҡта оялмай бар ғаләмгә һөйләп йөрөй? Был ваҡиғала, әлбиттә, уны ғына ғәйепләп булмай. Был улар тәрбиәләнгән мөхиткә бәйле булғанын яҡшы аңлайым. Шулай уҡ әсәһе менән атаһы гүр эйәһе булғансы мираҫ һәм вариҫлыҡ мәсьәләһен хәл итергә тейеш ине. Тап шул алдан һөйләшеп, килешеп эшләмәү сәбәпле туғандар араһында низағ барлыҡҡа килә. Ҡан дошманға әйләнгәндәр ҙә юҡ түгел. Ошоға оҡшаш күңелһеҙ хәлдәргә, иң беренсе, күңелендә туғанлыҡ хисе булмағандар тарый...

***Илдар ӘБДЕЛӘХӘТОВ, Салауат ҡалаһы:*** Беҙҙең халыҡта борон-борондан ғаиләлә туғанлыҡ хисе тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелгән. Бала кескәй саҡта уҡ эйә булырға тейеш сифаттарҙың береһе - туғаныңды ихтирам итеү. Ғаилә ағзаларының бер-береһен хөрмәт итеп, исемен дә атамай, апай, ағай, ҡустым, һеңлем йәки ҡәйнеш, балдыҙ, килен, кейәү тип кенә өндәшеүе башлыса башҡорттарҙа ғына осрай. Был күренеш туғандарҙың үҙ-ара йылы мөнәсәбәттә икәнен туранан-тура күрһәтә. Ғаилә татыулығы, берҙәмлегенең әһәмиәте тураһында туғанлыҡҡа ҡағылған терминдарыбыҙ, йолаларыбыҙ, мәҡәл-әйтемдәребеҙ ҙә күп һөйләй.

Мин үҫкән ғаилә бик ҙур түгел: әсәй, атай, мин үҙем һәм ҡустым ғына. Әммә ике яҡлап та өләсәй-олатайҙар һәм ике-өс туғандар менән тығыҙ бәйләнештә бер ҙур ғаилә булып йәшәйбеҙ. Бынан ике йыл элек шәжәрәбеҙҙе төҙөнөм һәм быға тиклем белмәгән яҡын ғына кешеләрҙең күп булыуын асыҡланым. Һөнәрем буйынса юрисмын. Атай малын бүлешә алмай хөкөм юлын тапағандар бик күп. Туғанлыҡ хисе булғандар бындай аҙымға бер ҡасан да бармай. Был - аксиома. Шуныһына ҡыуанам: улар араһында башҡорттар бик һирәк. Оло кешеләрҙе опекаға алыу күренеше лә беҙҙең халыҡта йыш осрамай. Был да өлкән йәштәге туғандарын, йәғни атай-әсәһен, олатай-өләсәйҙәрен балалары, ейән-ейәнсәрҙәре үҙҙәре тәрбиәләүенә ишаралай.

***Шамил СӘЛИМОВ, Өфө ҡалаһы:*** Беҙҙең халыҡ туған йәнле. Хатта дуҫына ла туғаны итеп ҡарағандар күп арабыҙҙа. Быны һис тә апаһы йәки ағаһы булмағанға тип аңларға ярамай. Ә ғаилә ағзаларына ҡарағанда уға нығыраҡ ышанғаны, уны рухи яҡтан яҡыныраҡ күргәне, фекере береккәне, таяныс таба алғаны өсөн дә шулай эшләргә мөмкин. Минең үҙемдең дә туғанымдай күргән дуҫтарым бар. Байрамдарҙы, балаларыбыҙҙың туй тантаналарын, хужалыҡтағы ҡулалмаш эштәрҙең барыһын да бергә үткәрергә ғәҙәтләнгәнбеҙ. Ҡыҙыҡһыныуҙар, маҡсаттар уртаҡ булғас, был мөнәсәбәт хатта туғандарҙыҡынан да көслөрәк тип әйтергә мөмкин.

Ярҙам итеү маҡсатында бөтөнләй сит кешене туған яһау йолаһы ла йәшәй халҡыбыҙҙа. Ҡиәмәтлеккә алыу тип атала ул. Түлһеҙ ғаилә олоғайған көндә яңғыҙ ҡалмаҫ өсөн ҡыҙ йәки улды ҡиәмәтлеккә ала ла, уның атай-әсәһенә баланы үҫтерергә, уны аяҡҡа баҫтырырға ярҙам итеү буйынса социаль бурысты үҙ өҫтөнә ала. Таныштарым араһында ла бар ундайҙар. Үҙенең ейән-ейәнсәрен күреү бәхетен көтөп ала алмаған хаҡлы ялдағы ир менән ҡатын күршеһендә йәшәгән аҙ килемле ғаиләгә балаларын тәрбиәләргә ярҙам итә. Үҙҙәре менән баҡсаға ла алалар, ял итергә лә йөрөтәләр, мәктәпкә әҙерләнергә лә булышалар. Ә иң мөһиме, туғанлыҡ хисе кисереп, ике яҡ та бер-береһенән ҡәнәғәт: ололар сарыф ителмәгән бала һөйөүен биреп ҡыуана, йәш ғаилә таяныр кешеһе табылыуына һөйөнә.

**Лена АБДРАХМАНОВА әҙерләне.**

✓ *Шуны аңламайым: власть үҙе бала табырға, ғаилә абруйын күтәрергә саҡыра, ә үҙе халыҡ бала тапмаһын, ғаилә ҡормаһын өсөн бөтәһен дә эшләй. Торлаҡһыҙлыҡ тураһында әйттем инде.*



ШУЛААЙ!



# КӘЛӘШ АЛМАЙЫМ,

## йәки Буйҙаҡ монологы

...Малайҙарҙың теле һуң асыла тиһәләр ҙә, мин иртә һөйләшә башлағанмын. Өлкәндәрҙең ҡыҙыҡ күреп мине һөйләндергәндәрен иҫләйем. Бигерәк тә "Кәләш алаһыңмы? Кемде алаһың?" тип аптыратырҙар ине. Бер ваҡытта ла "Алам", тимәнем, ахырыһы. Тәүҙә кәләштең кемлеген аңламағанмындыр. Белгәс тә һәр саҡ баш тарта инем. "Әсәй, кәләш алмайым", - тип илағаным хәтерҙә.

Үсмер саҡта ҡыҙҙарға күҙ һала инем һалыуын, тик ғишыҡ утым оҙаҡҡа етмәне: нисек дөрләп ҡабынһа, шул тиклем тиҙерәк һыуынды. Әсе телле еңгәләр, бәлки, һиңә кейәү кәрәктер, тип уҫал шаяртырға ла маташты.

Әле дүртенсе тиҫтәне ваҡлайым. Ғаилә ҡорорға ашыҡмағаныма хәҙер бер кем дә аптырамай. Өйләнеп, ҡайҙа алып барайым? Әсәй менән бер бүлмәле фатирҙа йәшәйем. Хәҙер бит килендәр ҡәйнә менән бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәргә атлығып бармай. Гәзит-журналда һирәк булһа ла осраған "Танышайыҡмы?" рубрикаһын ҡарап барам. Бөтәһендә лә тиерлек айырым тораҡлы, эсмәгән-тартмаған, өҫтәүенә, сибәр булған (фото һорайҙар бит) ир-егеттәр "һорау" менән файҙалана. Икенсе төрлә әйткәндә, "идеаль" булырға тейеш. Шундай хат яҙған гүзәл зат үҙе һәр яҡлап та өлгөлө, һоҡланғыс затмы икән? Белһәң ине шуны.

Һуңғы осорҙа ил демографияһын күтәреү, халыҡ һанын арттырыу тураһында юғары трибуналарҙан ҡыҫҡырыңға өйрәнеп алдылар. Төрлө төбәктә төрлө программалар, указдар ҡабул итәләр. Икенсе-өсөнсө һәм артабанғы балаларын тапҡан ғаиләгә Әсәлек капиталы бирелә. Хәҙер, ана, икенсе, өсөнсө балаһын табырға йөрөгән оло йәштәге ҡатын-ҡыҙ урам тулы. Мин хөкөмдар түгел, әлбиттә, береһен дә хөкөм итергә йыйынмайым. Шулай ҙа балалар һаулығын, милләт, киләсәк сәләмәтлеген ҡайғыртыу кәрәк тә баһа.

Тыуымды арттырыуҙың төрлө юлдарын тәҡдим итәләр. Хатта тәнгәләккә утты рубильниктан һүндерергә тигәндәре лә юҡ түгел. Был фекерҙән мәғәнә табырға була, һис шикһеҙ. Юғиһә, һәр береһе үҙенең яратҡан телетапшырыуын ҡарап, икеһе ике бүлмәлә йоҡлаған ирле-ҡатынлылар аҙмы ни хәҙер?

Шуны аңламайым: власть үҙе бала табырға, ғаилә абруйын күтәрергә саҡыра, ә үҙе халыҡ бала тапмаһын, ғаилә ҡормаһын өсөн бөтәһен дә эшләй. Торлаҡһыҙлыҡ тураһында әйттем инде. "Һәр кем алырлыҡ торлаҡ", тип лаф оралар. Ҡайҙа һуң ул? Минең кеүектәр бер ҡасан да ала алмай уны. Ситкә китеп эшләр инем, әсәйҙе кем ҡарар? Шуға күрә, ун-ун биш мең һумға риза булып эшләргә мәжбүрмен.

Эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ, хәйерселек тә ил демографияһын артҡа-түбәнгә һөйрәй. Балалар магазиндарындағы хаҡтарҙы күргәне бармы икән "бала, бала" тигән чиновниктар? Бала кейеме хаҡы өлкәндәрҙекенән кәм түгел бит хәҙер.

Ғүмер үткән һайын тәжрибә арта, тигәндәй, өйләнмәгәнемә һис тә үкенмәйем. Ҡартайған көнөндә кем бағыр, тиһегеҙҙер. Күҙ күрер. Ана, бер таныш алты балаһы булһа ла ҡарттар йортонда көн күрә. Ғүмер ҡояшым офоҡҡа яҡынлағас, минә лә шунан бер урын табылыр әле, моғайын...

**Береһе илай, береһе йырлай, береһе нимәлер һорай... Уларҙың ғаиләһе менән әңгәмәләшкәндә ҡапыл "Өс егет" тигән йырҙың шулай үҙгәртелгән юлдары ҡолаҡта сыңлап-сыңлап китте. Балалы, бигерәк тә бер-береһен баҫып килеп өс малай үҫкән йортта шулай булырға тейештер ҙә. Күгәрсен районы Юлдыбай ауылы ҡыҙы, бөгөн Башҡортостан юлдаш каналы аша таныш Гөлсимә менән Хәйбулла районы Йәнтеш ауылы егете, М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының бүлек мөдире Даян ИШТАНОВтар ғаиләһендә лә бөгөн илаша-мыжыша-йырлаша үҫеп килгән малайҙар ҙа тиҙҙән егет ҡорона инер әле. Әлегә, малайҙарҙы аталары албырғатып торған арала, беҙ хужабикә менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Никах сәғәтең һуҡһа, башлыҡҙле булғаныңды һиҙмәй ҙә ҡалаһың, тиҙәр. Һеҙҙең никах сәғәте ҡасанырак һуҡты, шунда уҡ берберегеҙҙе "Ул минең насибым", тип ҡабул иттегеҙме, әллә "кәнфитгөлләмә" осорон оҙаҡҡа һуҙып йөрөнөгөҙмө? Кем үҙенә яуаплылыҡ алып, никах тураһында һүҙ ҡуҙғатты?**

- Беҙ Даян менән БДУ-ла башҡорт теле һәм журналистика факультетында уҡыныҡ, шунда танышыҡ, уҡыуҙы тамамлағансы өс йыл дуҫлашып йөрөнөк. Кем яуаплылыҡ алды, тигәндән, беҙҙең йола буйынса ҡатын-ҡыҙ башлап һүҙ ҡатмай инде. Даян беренсе һүҙ башланы, өйҙәренә алып ҡайтып, ата-әсәһе менән таныштырып, һуңынан бөтөн йолаларға тап килтереп һората килеп, 2008 йылда матур итеп туй үткәреп, шулай һуҡты беҙҙең никах сәғәте.

шалар. Әле ике өлкәнен һауыт-һаба йыуырға өйрәтәм, иҙән йыуҙырам. Атайҙарына ла ярҙам итәләр. Тәрбиәбеҙ һәҙмәтәһе нисек булғанын малайҙарыбыҙ үҫкәс күрербеҙ инде.

**Бер ваҡыт балалары тыуғас, ир менән ҡатын аҡыл эйәһенә килеп: "Сабыйыбыҙҙы ҡасан, нисек тәрбиәләй башлайыҡ?"- тип һорағандар. Аҡыл эйәһе уларға: "Һеҙ тап 9 айға һуңлағанһығыҙ", - тип яуаплаған. Ә һеҙ балаларығыҙҙы тәрбиәләүҙе ҡасан башланығыҙ?**

- Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр, тигән кеүек, үҙебеҙ - Бер һәбаҡта үҫкән сәсәкәләр ҙә, бер үк сәскәнең япраҡтары ла төрлө-төрлө була. Шуның кеүек, бер ата-әсә балалары ла бер иш булмай, һәр береһе үҙенсә, үҙенең холҡо менән тыуа. Беҙ бына ғаиләлә өс ҡыҙ үҫтек, өсөбөҙҙә өс төрлө холоҡ, шуның кеүек, беҙҙең малайҙарҙың да холҡо өсөһөнөкө өс төрлө. Кемдер етеҙерәк, кемдер яйыраҡ, кемдер еңмешерәк. Шуға, маҡтағанда, эш ҡушҡанда, эштәрен эшләгәндән һуң кеүәтләгәндә, йә булмаһа, сәмләндереп ебәргәндә уларҙың был үҙенсәлектәрен иҫәпкә алабыҙ. Мәҫәлән, өлкәне үҙенә ниндәйҙер маҡсат ҡуйып, шуға өлгәшә белә, бәләкәй булһа ла шундай холҡо бар. Ниндәйҙер эш ҡушырға йә уҡыуында ниндәйҙер маҡсаттар ҡуйырға кәрәк булһа, ошо холҡон да файҙаланабыҙ. Уртансыһының һәр аҙымын маҡтап торорға, үҙенә ныҒыраҡ ышаныс тыуҙырырға кәрәк. Бәләкәсе әле еңмеш, шул еңмешлек менән алдыра. Уның холҡо әле ныҡлап формалашып етмәгән, шулай ҙа еңмешлек бала саҡта була икән, ул ҙурайғас та була бит инде. Нимә әйткем килә, һәр береһенә айырым ҡараш бар, барыһын да

# ӨСӨНСӨ

донъябыҙ



**Бөгөн һеҙ өс малайҙың ата-әсәһе. Ғаиләлә кемгә ауырыраҡҡа тура килә икән: ир-егеттәргәме, әллә яңғыҙ ғына булған әсәйгәме?**

- Был "яңғыҙ ғына булған әсәйгә" тигән һүҙ күңелдә ҡытыҡлай әҙерәк... Әгәр ҙә философик күҙлектән ҡарарһаң, һәр кеше яңғыҙ, әммә ғаиләлә кемдер берәү яңғыҙ була алмайҙыр ул. Беҙҙең өйҙә шулай ҡоролған: ҡатын-ҡыҙ эше, ир-егет эше тигән бүленеш юҡ. Ул беҙҙең атай-әсәйҙәрҙә лә шулай килгән. Ғәҙәти, ысын башҡорт ғаиләһе булараҡ, ир-ат ҡырыҫыраҡ булһа ла, уларҙың үҙ урыны бар, әммә ғаиләлә ундай ҡырҡа бүленеш юҡ ине. Шуға ғаиләләребеҙҙә ниндәй тәрбиә алғанбыҙ, балаларыбыҙға ла шундай тәрбиә бирәбеҙ. "Тәрбиә бирәбеҙ" тигән һүҙгә мин ябай һүҙ итеп кенә ҡарайым. Ғәмәлдә, үҙебеҙ нисек үҫкәнбеҙ, балаларыбыҙ ҙа шулай үҫә, әҙерәк заманса үҙгәрештәр бар инде, балаларға ҡарата демократик елдәр ныҒыраҡ иҫә, тип әйтәйемме. Малайҙар өйҙә ярҙамлаша, аш-һыу тирәһендә лә булыниндәй ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы күреп үҫкәнбеҙ - шуларҙан тайпылмайбыҙ тиер инем. Шул уҡ ябай ғына кеүек күренгән "Башта атай һөйләп бөтһөн, шунан ғына һин һөйләйһең", "Әсәйең һөйләй, көтөп тор, тыңлап тор" тигән тыйыуҙар аша ололарҙы хөрмәт итергә лә өйрәтәбеҙ. Бында бит атай-әсәйҙе генә күҙ уңында тотмайһың, ә үҙеңдән өлкәндәрҙе ихтирам итергә кәрәклеген һеңдерәһең. Әлбиттә, заманса итеп тәрбиәләргә тырышһаҡ та, башҡорт ғаиләһенә хас һүҙҙәр, тәрбиә алымдары, өлкәндәрҙе тыңлау, уларҙы бүлдермәү, һөйләгәндәрен көтөп тыңлап тороу кеүек һүҙҙәр барыбер ҙә ҡабатлана.

**Бер туған булһалар ҙа, ғаиләлә балалар төрлө: характерҙары, тәртиптәре, зауыҡтары, аш төрләндереүҙәре һ.б. менән айырылып тора. Был, моғайын, һеҙҙең ғаилә өсөн дә ташлама түгелдер. Уларҙың һәр береһенә айырым ҡараш, айырым мөнәсәбәтме, әллә барыһын да бер ҡалыпҡа һалырға тырышаһығыҙмы?**

бер ҡалыпҡа һалып булмай. Ғаиләлә ниндәй тәрбиә алғанбыҙ, тиһәк тә, барыбер педагогиканы уҡығанбыҙ, психологияны өйрәнгәнбеҙ, ошо алған белемебеҙ ҙә үҙенең йоғонтоһон яһай. Хәҙер педагогик процесса ла һәр балаға индивидуаль ҡараш тигән алым бар. Бына шуларҙың барыһын да күҙ уңында тотабыҙ инде.

Шулай ҙа өс улыбыҙ бер йомғаҡ кеүек. Йәш аралары ла ҙур булмағас, Бәхтейәр, Баязит, Байназарҙы өсөһөн бергә күргән кешегә тәүҙә шоҡ була: береһе илай, береһе йырлай, береһе нимәлер һорай. Йәки өсөһөнә бер юлы нимәлер кәрәк. Ә беҙ был хәлгә өйрәнгәнбеҙ, шулай булырға тейеш кеүек ҡабул итәбеҙ.

**Балалар тыуғанда ер йөҙөндә булған барлыҡ белемгә эйә була, ул белемде ғаилә, балалар баҡсаһы, мәктәп, вуз, йәмғиәт яйлап ҡына ҡыҫырыҡлап сығарып, үҙенә уңайлы программа һала, тиҙәр. Ошо ҡараш менән килешәһегеҙме? Ғөмүмән, балалар беҙҙе тәрбиәләй, тигәндә нисек аңлайһығыҙ?**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



## АТАЙ ТӘРБИӘҺЕ

**Атайҙар улдарын үҙҙәре белмәгәндә-һиҙмәгәндә, йоҡлап ятҡанында ғына һөйөргә тейеш, тигән яҙылмаған ҡағиҙә бар.**

Был һүҙҙәрҙе тура мәғәнәһендә лә, киңәйә рәүешендә лә ҡабул итергә кәрәктер ул, тием. Һөйөү, назланыу, нәзәкәтләнеү ниндәйҙер кимәлдә кешенең йомшаҡ күңелле булыуын, ихтыярһыҙлығын, ҡатын-ҡыҙҙарға хас нескә хисле булыуын күрһәткән кеүек. Ә кешенең күңеле, ул ирме, ҡыҙҙарға хас нескә хисле булыуын күрһәткән кеүек. Ә кешенең күңеле, ул ирме, ҡыҙ-ҡатынмы, таш түгел, ҡасандыр бер килеп урғылыр, түгелер, яҙылыр һәм ял итер мөҙҙәте етә. Тимәк, "атайҙар улдарын үҙҙәре белмәгәндә-һиҙмәгәндә, йоҡлап ятҡанында ғына һөйөргә тейеш" тигән ҡағиҙә атай булған кешенең бары тик улдары белмәгәндә-һиҙмәгәндә йәки йоҡлаған саҡтарында ғына тик үҙҙәре хаҡында ҡайғыртып, хискә бирелә алыуы хаҡында ла һөйләй бит. Тимәк, атай булған кешенең улдарының күҙе алдында көсһөҙ, баҙнатһыҙ, самаһыҙ хискә бирелеүсән, ихтыярһыҙ булып күренергә, күҙ йәшен күрһәтергә хаҡы юҡ. Был - үҙ миҫалың менән тәрбиәләүҙең иң камил өлгөһөләр ул. Кем белә, бәлки, чечендарҙың "Улыңа дошман бул, ул үҫеп еткәс, һинең иң яҡын дуҫыңа әүерелер", тигән мәҡәл-әйтеменең бер аңлатмаһы беҙ һүҙ алып барған ҡағиҙәлә лә яталыр.

## ҠАРТАТАЙ ТӘРБИӘҺЕ

**Бер мәл көпә-көндөҙ 96 йәшлек ҡарт түгелеп илап ултыра икән. Унан ни сәбәпле илап ултырыуы хаҡында һорашҡас, ул: "Атайымды тыңлашмағайным, ҡартатайым тукманы", - тип яуап биргән. Уға: "Алйот, ҡартатайыңдың тукмағаны өсөн түгел, иҫән булғаны өсөн шатлығыңдан иларға кәрәк һиңә...", - тип әйткәндәр тегеләр ҡартҡа.**

Был хәл, ай-һай, беҙҙә булмағандыр ул. Ни өсөн тигәндә, башҡорт донъяһында ҡартатай менән ейән, ҡартәсәй-өләсәй менән ейәнсәр араһындағы мөнәсәбәт иң самими мөнәсәбәттәрҙән һанала. Бында шундай башваҡыс килеп сыға: ейән булған кеше атаһынан күрмәгән игелекте, йылы мөнәсәбәтте, яҡшы мөғәмәләне ҡартатаһынан, ә ҡартатаһы улына бирмәгән наҙҙы һәм илһылыҡты ейәненә бирә.

Бында "Баланың балаһы балдан татлыраҡ була", тигән мәҡәл-әйтем генә ярап бөтмәйҙер, ахыры. Мәсьәләнең асылы төптәрәк яталыр. Атай һәм ҡартатай булған ике кеше, алдан килешеп-һөйләшеп ҡуймаһалар ҙа, улға-ейәнгә ошондай мөнәсәбәттә булып, икеһе лә бер үк ғәмәлде башҡара. Береһе, ҡартатай - улына бирә алмаған һыуһынын ҡандыра, икенсеһе, атай - үҙ атаһынан алып бөтмәгән ҡырыҫлыҡты улына ҡарата мөнәсәбәт менән яндыра. Тәрбиәнең бындай үҙенсәлекле һәм ҡатмарлы формаһын кем уйлап сығарғандыр, ҡасан башланғандыр, әммә ул беҙҙең ҡанда йәшәй. Нисек кенә булмаһын, тәрбиә объекты булған үсмерҙә ысын ирҙәргә хас характер формалаштырыуға был мәктәп тотош бер институтты тәшкил итерлек. Тик атайҙар һәм ҡартатайҙар ғына иҫән-һау булһын.

Шуныһы ла бар: атайҙарҙың улдарына ҡарата булған "ҡырыҫ" мөнәсәбәтен әсәйҙәр бик оҫта файҙалана. "Атайыңа әйтәм!" тигән бармаҡ янаулы мөнәсәбәт бына ошонан барлыҡҡа килгән дә инде. Был хаҡтағы һөйләшеүҙе гәзитебеҙ биттәрендә тағы дауам итәйек әле, хаттар көтәбеҙ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

# ИРЕМ ЯҠШЫ БИТ МИНЕҢ!



**Байтаҡ йылдар күрмәй торған һабаҡташымды бер осраттым. Хәҙерге көндә райондарыбыҙҙың береһендә абруйлы табибә булып киткән был танышыма: "Һин һаман да элекке һымаҡ мөләйем, әле булһа йәш сырайлыһың, Гөлнур. Бер ҙә бирешерлек түгелһең, күҙ теймәһен..." - тип теҙеп алып киттем. Һабаҡташым һис кенә лә уйлап тормаҫтан, ошо һүҙҙәрен әйтә һалды: "Ирем яҡшы бит минең..." Артабан нимәләр хаҡында һөйләшкәнебеҙҙе әллә ни иҫләмәйем, әммә уның иң башта әйткән ана шул һүҙҙәре хәтеремдә ныҡ уйылып ҡалды. Ҡатын-ҡыҙҙың үҙ хәләл ефетенә ҡарата әйтелгән ошонан да йылыраҡ, ягымлыраҡ һүҙҙәр булыуы мөмкинме! Уның ғаиләһен, тормош иптәшен бер ҡасан да күргәнем булмауына ҡарамаҫтан, ғаиләһендә тыныслыҡ, татыулыҡ, үҙ-ара мөхәббәт тантана итеүен шунда уҡ күҙ алдына килтерҙем һәм уның өсөн ысын күңелдән шатландым.**

Һирәк кенә булһа ла ана шундай ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы осратырға тура килһә, уларға булған бөтә ихтирамым мәртәбәләргә арта. Бынан бер нисә йыл элек бер еңгәмә медицина университетында уҡып йөрөгән кесе ҡыҙҙары тураһында һорау биргәйнем: "Ләйсән тормошҡа сығырға уйламаймы әле, еңгә?" Ҡыҙҙарынын: "Атайым кеүек яҡшы кеше тапмаһам, бөтөнләйгә кейәүгә сыҡмаҫмын ул", - тиеүе хаҡында ишеткәс, бөтөнләй "иреп төштөм". Юлиә еңгәнең ошо һүҙҙәрен һәр саҡ туғандарым алдында миҫал итеп һөйләйем. Атаһын - минең ике туған Камил ағайымды шундай юғары баһалаған ҡыҙына, айырыуса, шул баһаны хуплаусы еңгәмә күпме мәртәбәләр рәхмәт һүҙен ҡабатлаһам да аҙ булыр һымаҡ...

Оло үкенескә, барса ғаиләләрҙә лә ундай "һау мөхит" хөкөм һөрмәй шул. Ғаилә именлеге хаҡында һүҙ йөрөткән булып, башлыса ирҙәр "иххатаһына" ғәйеп ташлауҙарға әүәҫтәрҙә лә күрергә тура килә. Бәғзе бер ҡатын-ҡыҙҙарҙың: "Ә-әй, ундай бер ир буламы..." - тип, иренең йә был, йә башҡа етешһеҙлеген асып, һүҙ ҡуйыртыуын күптәрҙең ишеткәне барҙыр, моғайын. "Һөйөклөһө"нөң эш хаҡы кимәле башҡаларҙыҡынан түбән, йә йорт-ҡураһындағы эшенең күршенекегә ҡарағанда насарыраҡ булыуын, йә булмаһа, тағы ла ниндәйҙер етешһеҙлеген табып, туғандарына, әхирәттәренә, хатта үҙ балаларына ла һөйләргә яратҡан гүзәл заттарыбыҙға уларҙың ошо мәсьәләлә бигүк ғәҙел булмауы хаҡында әйтер һүҙем. Беренсенән, был донъяла етешһеҙлеге булмаған бер кешенең дә юҡлығын хәҡиҡәт тип ҡарау кәрәк. Тик бәйғәмбәрҙәр генә һәр яҡтан камил булған. Хатта "һәр йәнәттән килгән", тип һаналған әҙәм балаһының да барыбер ниндәйҙер бер кире яғы була. Минең ныҡлы инаныуымса, күрә белгән, дөрөҫөрәге, күрергә теләгән кеше барыбер башҡаларҙың яҡшы яғын таба ала. Минеңсә, ирҙең янында ла уның һиңай сифаттарының береһен генә булһа ла күтәрмәләп алырҙай ҡатыны булыуы - оло бәхет. Ҡатын кеше аҙым һайын хәләл ефетен "өйкәп", уны тәнҡитләргә, яманларға тырышып тормаһа, бындай ғаилә һәр саҡ өлгөлө лә була ала. Сөнки ошондай татыу ғаиләлә ир кешенең тегеләй йәки был кәмселеген уның аҡыллы ҡатыны шымартып тора. Бындай осраҡтарҙа ғаилә башлығының ниндәйҙер булһа етешһеҙлеген күрше-тирә лә белмәй. Балалары ла атаһының тыуымыштан булған бер аҙ кире яғын тоймай, тик уның яҡшы яҡтарын ғына күреп үҫә. Шуға күрә улар атаһын һәм әсәһен берҙәй ихтирам итеүсән.

Хәләл ефетенә зарланырға яратыусы ҡатын хаҡында бер хәҙис тә бар. Бер мәл Ибраһим бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм улына хәл белешергә килә. Ә уның улы Исмәғил был ваҡытта ҡайҙалыр ҡырға киткән була. Бәйғәмбәр килененән хәл-әхүәл һораша. Килене ҡайныһына иренән зарланырға тотона. Ибраһим ғәләйһис-сәләм килененә ҡаршы бер ни ҙә өндәшмәй, тик "Улыма әйт, өй тупһаһын алыштырһын", тигән сәләм тапшырырға ҡуша. Исмәғил ҡайтҡас, ҡатыны ҡайныһының сәләмен еткерә. "Ҡатыныңды айырып, башҡаға өйлән", тип аңлай Исмәғил атаһының был сәләмен, һәм уның бойороғон үтәй. "Ҡатын айырыу - пүстәк кенә нәмә икән", тигәндә аңлатмай, ә ерле-юҡҡа иргә зарланыуҙың бик тә насар булыуы хаҡында был риүәйәт...

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләмдең "Ҡатын кешенең ожмахы - иренең аяҡ аҫтында", шулай уҡ, "Ирен һанламаған ҡатын-ҡыҙҙың доғаһы уның баш осонан да юғары күтәрелмәҫ", тип әйткәндәре хаҡында ла беләйек. Шәриғәт ҡанундарында һәр ғаиләлә булырға тейешле үҙ-ара ихтирам хаҡында күп әйтелә. Ҡатын-ҡыҙҙарҙы хөрмәт итеү, уларға бер ҡасан да асыуыңды сығарырға ярамау тураһында бәйғәмбәребеҙҙең ир-аттарға йүнәлтелгән хәҙистәре бихисап. Аллаһ илсеһе ғәләйһис-сәләм шәхсән, үҙе ҡатындарына һәр саҡ ягымлы булыуы менән бөтә ир-ат халҡына үрнәк булып тора.

...Иң башта иҫкә алып киткән һабаҡташым Гөлнурҙың ғаилә хәлен яҡындан белмәйем, әммә уның тормошоноң ал да гөл булыуына һис кенә лә шикләнмәйем. Ә бына атаһы һымаҡ яҡшы кешегә генә кейәүгә сығырға хыялланған Ләйсәнде тәрбиәләп үҫтергән Камил ағайым һәм Юлиә еңгәмдәр менән аралашып йәшәйбеҙ. "Атанан күргән - уҡ юныр, инәнән күргән - тун бесер" тигәндәй, ике ҡыҙы ла аҙәпле, эшсән, кеселекле, туғандарға яҡшы мөнәсәбәтле булып үҫкән. Әйткәндәй, Ләйсән һылыуға килгәндә, уға ысынлап та Күгәрсен районы егете Илмир менән табышып, уның менән тормош ҡорорға Аллаһ Тәғәлә насип иткән. Кейәү - Ләйсәндең коллегаһы, хирург. "Ләйсәндәр нисек йәшәп ята, - тип ҡыҙыҡһынам туғандарымдан. - Кейәү нисек?" "Аллаға шөкөр, кейәүебеҙ - бынамын тигән, минең үҙемә оҡшаған!", - тип ярым шаяртып яуап бирә Камил ағай. Оло ҡыҙҙары Айгөл дә, бер нисә йыл инде, Динар кейәү менән үҙаллы татыу ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп, ал да гөл йәшәп ятыуҙары. Әйтергә кәрәк, ҡыҙҙар үҙҙәренең хәләл ефеттәренә ҡарата ифрат та ихтирамлы. Ирҙе һанлау "әлифбаһын", моғайын, әсәләренән күсереп алған улар. Тап бына шундай ғаиләләребеҙ тағы ла күберәк булыуын Аллаһ Тәғәләнән һорайым.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ҠЫҘЫҠ!

# АЛТМЫШТА ЛА...

## ғаилә ҡоралар, имеш

**Башҡортостанда беренсегә никахҡа ингән ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда күберәк икән.**

Былтыр республикала 25 меңдән ашыу ғаилә барлыҡҡа килгән, йәғни үҙенең мөнәсәбәтен рәсмиләштергән. 2018 йыл менән сағыштырғанда был һан яҡынса 300-гә кәмерәк.

18,2 мең ир-егет (72,6 процент) беренсегә өйләнгән, 17,4 мең ҡатын-ҡыҙ (69,3 процент) икенсе тапҡыр кейәүгә сыҡҡан. Дөйөм коэффициент, йәғни бер мең кешегә никах һаны 6,2 тәшкил иткән.

Республиканың статистика бүлеге хәбәр итеүенсә, никахҡа инеүселәрҙең 60-65 проценты икенсе ярты йыллыҡҡа тура килә. Йылдағыса, ғаилә ҡороусыларҙың иң аҙы - майҙа, иң күбе йәй көнө һәм сентябрҙә теркәлә.

Былтыр өйләнешеүселәрҙең күбеһе 20-нән 34 йәшкә тиклемгеләр булған. Үткән ун йыллыҡ менән сағыштырғанда, иртә ғаилә ҡороусылар һаны кәмегән. Мәҫәлән, 1990 йылда 1356 балиғ булмаған йәштәге ҡыҙ кейәүгә сыҡҡан һәм 18 йәшкә тиклемгә 226 үсмер өйләнгән. Былтыр иһә 18 йәшкә тиклем 162 ҡыҙ кейәүгә сыҡҡан, 7 егет өйләнгән. 2019 йылда беренсегә кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙарҙың уртаса йәше 26,4 булһа, егеттәрҙеке - 28,7.

Алтмыш һәм унан өлкән йәштәге 700 ир-егет, 424 ҡатын-ҡыҙ никахын теркәгән. Был һан 2018 йыл менән сағыштырғанда күберәк.

Рәсми никахта булған ғаиләләрҙә былтыр 34657 бала тыуған. Шул иҫәптән 17893 малай, 16764 ҡыҙ.

***✓ Тауыҡ түгел - торғаны бер мөғжизә инде. Ҡыҙыл тауыҡ тора-бара ихатабыҙҙың "атҡаҙанған хеҙмәткәренә" әйләнде. Ул иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә бала сығарып, бала бағыуҙан бушаманы. Йәй рәхәтлеген дә күрмәй ҡала ине.***



## ҠЫҘЫЛ ТАУЫҠ

Башҡа ҡош-ҡорт тураһында яҙып та, ғүмер юлымда осраған ғәжәп бер тауыҡ хаҡында онотоп ҡалдырһам яҙыҡ булыр ине. Ябай ғына тауыҡ булһа ла уның быға хаҡы барҙыр, тип уйлайым. Хәйер, хөкөм уҡыусы ҡулында...

Баҙарҙа ярым бройлер тип аталған себештәр менән һатыу итәләр. Көн һалҡынса, шуның өсөн улары тауыш алдырмай соролдаша, өшөп ҡалтыраналар. Һатыусы ҡыҙ, йомортҡаны күп һала, ите лә мул була, тип маҡтағас, ҡыҙыҡһынып, унауҙы алдым. Күп ваҡыт та үтмәҫтән, мин алданғанымды аңланым. Себештәр үҫә барған һайын берәм-берәм аяҡтан яҙа башланылар. Йә тубыҡтан тәпәйҙәре кәкрәйә, йә бармаҡтары бороша. Тимәк, баҙарҙа уҡ һалҡын тейҙергәндәр. Минең фаразды бер танышым да раҫланы: "Былары йомортҡанан сыҡҡас та ныҡ өшөткәндәр, - тине ул, - табандарынан һыуыҡ үткән, мал була алмаҫтар". Эй был алыпһатарҙы, күпме тапҡыр төп башына ултырта, ә мин һаман шул тырмаға баҫам! Һаман кисәмәйем. Әлеге танышымдың кәңәше буйынса себештәрҙең тәпәйҙәрен көмөшкәгә баҫтырып та ҡараным, файҙаһы булманы. Ваҡыт үткән ине.

Зәғиф, тип себештәрҙе сығарып ташлап булмай бит инде, тәрбиәләргә тотондом. Улар тиҙ эреләнде. Көҙгөләккә инде ҡәҙимге тауыҡ инеләр. Шуныһы ҡыҙыҡ, сеп-сей саҡтарында бер иш тауыҡтарҙың хәҙер һәр береһе бер төҫтә. Араларында сыбары ла, күгелйеме лә, һарғылты ла, хатта бер ҡыҙылы ла бар. Йылҡылдашып йөрөгән өс әтәстең ғүмере ҡыҫҡа булды. Бер әтәс менән алты тауыҡты көтөргә тип алып ҡалдым. Ярайһы ғына эре тауыҡтар кәкре бармаҡтарының осона ғына баҫып, түйтанлашып йөрөйҙәр, емгә һайлансыҡ түгелдәр. Шуныһы аптыратты: ҡышҡы һыуыҡтарға ҡарамай, йомортҡа һала ла башланылар. Әрһеҙҙәр икән. Ябай тауыҡтарҙыҡына ҡарағанда байтаҡҡа эрерәк һәм ҡыҙғылт төҫтәге йомортҡаларҙы көн дә алып торабыҙ. Ҡыҙыл йомортҡалар башта әллә ҡалай һымаҡ күренә ине (ауыл тауығының йомортҡаһы бит селт-аҡ була), тора-бара уныһына ла өйрәнелде.

Шулай ҙа сатлама һыуыҡтар үҙенекен эшләне, былай ҙа зәғиф тауыҡтар, яҙ яҡынлашыуға, бөтөнләй аяҡтан яҙа башланылар. Тиктомалға салҡан әйләнеп китәләр ҙә, тора алмайынса тыпырсынып тик яталар. Ҡолаған береһен һуйып ашай торабыҙ. Завод тауыҡтарының ите, ысынлап та, мул һәм тәмле ине. Үҙҙәре һимеҙҙәр. Шулай итеп төрлө төҫтәге матур тауыҡтарым бөттө тиерлек. Араларынан әҙме-күпме үҙаллы атлап йөрөй алғандай һыңар ҡыҙылы ҡалды. Уныһын да, баҫырға йыйынып, ҡорҡолдай башлағанға ғына алып ҡалдым. Алып ҡалдым һәм үкенмәнем.

Зәғиф кенә булһа ла ул тауыҡтың аҡыллылығына аптырай инем. Бер һүҙ менән әйткәндә - ул торғаны тере инкубатор ине. Башта бер ҡарышмайынса ун-ун бер өйрәк йомортҡаһын баҫып сығара. Һуңынан ябай тауыҡтыҡын һалабыҙ. Уларын да баҫа. Тәүге йылда ул шулай итеп өс тапҡыр себеш сығарҙы. Сыҡҡан берен икенсе, баҫырға иренгән тауыҡтарға ҡуша торҙоҡ. Икенсе йылына, йәлләп, уны ике тапҡыр ғына баҫырға яткырҙыҡ. Шуныһы ҡыҙыҡ: "тере инкубаторыбыҙ" ятҡан ерәнән күтәреп алмайынса, үҙе һис төшөп китмәй ине. Шуға күрә ике тәүлеккә бер тапҡыр ояһынан төшөрөп йөрөтәбеҙ. Ныҡ ашамһаҡ та булманы. Нимә бирһәң - шуға риза. Үҙенең тыныслығы иҫ китмәле. Себештәренә ҡағылалар, тип, башҡа тауыҡтар ише бер ваҡытта ла елкәнә осоп ҡунмай. Сит оя себештәрен дә, тауыҡмы ул, башҡа ҡош-ҡортмо, ситләтеп тормай. Янына ниндәй генә себеш ебәрһәң дә ризалыҡ менән ҡабул итә лә ҡуя. Тауыҡ түгел - торғаны бер мөғжизә инде. Ҡыҙыл тауыҡ тора-бара ихатабыҙҙың "атҡаҙанған хеҙмәткәренә" әйләнде. Ул иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә бала сығарып, бала бағыуҙан бушаманы. Йәй рәхәтлеген дә күрмәй ҡала ине.

Ошо рәүешле йылдың-йылы ҡабатлана торҙо. Хәйер, хеҙмәтенә күрә, ҡыҙыл тауыҡтың үҙенең дә ҡәҙере булды - майҙа йөҙгән кеүек кенә йәшәне. Тәпәйҙәре эшкинмәгәнлектән, ул төнөккә үҙаллы менеп ултыртылмай ине. Көн дә үҙем күтәреп ултыртыр булдым. Үтә ныҡ һыуыҡтарҙа үҙен генә айырып ябыу өсөн айырым йылы оя яһап ҡуйҙым. Ғәжәп, уны башҡа тауыҡтар ҙа ихтирам итәләр һымаҡ ине: емене талашып йөрөмәйҙәр, низағлашмайҙар. Бәлки, уның үткер сукышынан ҡурҡҡандарҙыр, әммә яҡын килергә, нисектер, ҡыймайҙар. Шулай бер нисә йыл үтеп китте. Ҡыҙыл тауығыбыҙ йомортҡа ла һала, баҫырға ла өлгөрә, һуңынан үҙенең дә, башҡа һәпрә тауыҡтарҙың да себештәрен көтә.

Тағы яҙ етте. Инде көндәр йылынғас, ҡыҙыл тауыҡты төнөккә күтәреп ултыртмаһаң да була. Ул хәҙер ипһеҙ-оҙон, кәкре тырнаҡтары менән ҡайын таҡталар буйлап тыҡ-тыҡ баҫып йөрөй, иҙәндә генә ултырып төнәй. Шулай ҙа бының аҙағы хәйерһеҙ тамамланды.

Иртәләрҙең береһендә, мал-тыуар тәрбиәләргә сыҡһам, ҡыҙыл тауығыбыҙ һыйыр бүлемендә салҡан төшөп хәрәкәтһеҙ ята. Башта өҫтөнә һыйыр баҫып тәләфләгәндер, тип уйланым. Ләкин улай булмай сыҡты. Тауыҡтың... башы юҡ ине. Эштең асылына шунда уҡ төшөндөм: шәшке эше! Алмаштырғыһыҙ инкубаторыбыҙҙы, ысынлап та, шәшке быуған булып сыҡты. Оя эсенән һөйрәп сығара алмайынса башын ҡыркырға мәжбүр булған, йүнһеҙ. Күршебеҙҙең, тауыҡтарҙы шәшке ала, тигәнен ишеткәйнем бит инде, иғтибар бирмәгәйнем, хәҙер үкенеп бөтә алмайым. Кемдер, кеше тауыҡ өсөн дә үкенер икән, тип уйлар, әммә "тере инкубатор" үкенерлек ине.

Һөмһөҙ шәшкегә асыуым ҡабарҙы: ҡон ҡайтармаһаммы. Ҡондан былайыраҡ, тауыҡ итенең тәмен бер тойған кейек кетәккә ҡабат киләсәк. Һис шикһеҙ. Шуға күрә уны юҡ итмәйенсә ҡотолоп булмаясаҡ. Шәшке юлына тауыҡтың һыуынып ҡатҡан түшкәһен һалдым да тоҙаҡ ҡорҙом. Бәләкәс йыртҡыс шул төндә үк эләкте. Ул тоҙаҡҡа быуылып үлгәйне. Шул рәүешле ҡон да ҡайтарҙым, башҡа тауыҡтарымды ла һаҡлап ҡалдым. Ярым-бройлер ҡыҙыл тауыҡтың шанлы ғүмер юлы бына шулай тамамланды. Быйыл шундайҙарҙан тағы алырға иҫәп бар әле, шәп тауыҡтар.



*Иҙрис НОҒОМАНОВ*

# ҺУНАРСЫ ЯҘМАЛАРЫ

## АСЛЫҠ

Төлкөгә ҡапҡан һалыу өсөн ҡулай урындарҙы мин алдан ҡарап, билдәләп сығам. Шулай иткәндә күпкә еңелерәккә тура килә: һис юғында, ауыр ҡапҡандарҙы бушҡа йөкмәп йөрөмәйһең. Урманға бөгөнгө сәфәремдең дә маҡсаты ошо. Ҡайҙандыр һиҙә һалып алған Аҡтырнаҡ та эйәрҙе. Ҡайҙа эйәрһен - алдан төштө! Ғәҙәттә, эҙҙәрҙе тапап бөтә, тип мин уны алып йөрөмәйем, был юлы, нисектер, ҡаршы килмәнем. Эт күңеле - бер һөйәк, рәхәтләнеп йөрөп ҡайтһын әйҙә. Лайка тоҡомло эттәргә хәрәкәт кәрәк. Хәрәкәтһеҙ торһалар, һунар ҡомарын юғалталар. Еңеллекте артығыраҡ теләнем, ахыры, ҡушкөбәгемде лә алып торманым. Белһәм икән аҙаҡ үкенеремде...

Ауылыбыҙҙан ике саҡрым самаһы араулыҡта ултыртылған матур ҡарағайлыҡ бар. Ана шунда етеүгә күптән түгел генә үтеп киткән бүре эҙенә тап булдыҡ. Яңғыҙ йыртҡыс, күкрәге менән йомшаҡ, тәрән ҡарҙы йырып, ҡайҙалыр, төпкөлгә тартҡан. Бүре бының ише ҡараңғы шырлыҡтарҙы урап үтеүсән. Ул тирә-йүн яҡшы күренеп торған алаңғыр һырттарҙы үҙ итә. Унда ҡурҡынысһыҙыраҡ. Аҙым һайын әжәл һағалап торған аҡыллы йыртҡысты, күрәһең, тормош үҙе шулай өйрәткән.

Бүре эҙенә, бигерәк тә ошоноң кеүек ҡараңғы урындарҙа тап булғанда, өҫтәүенә яурыныңда мылтығың юҡ саҡтарҙа, теләйһеңме-теләмәйһеңме, күңелде икеле-микеле уйҙар солғап алыусан. Уйламаҫҡа тырышып ҡарайһың, барыбер шомландыра. Был юлы ла әлеге тойғоларҙан ҡотолоп булманы. Февраль айы - бүренең иң ас мәле, ә миндә асмалы бәкенән башҡа ҡорал юҡ. Ошондай ваҡытта ҡоралдың кәрәклеһе өйҙә ҡалды. Яҡшы беләм: аслыҡ үҙәгенә үткән бүре йәнен аяп тормай - әжәлдән ҡурҡмай. Аҡылын юйған ас бүренең хатта ажғырып килгән трактор тәгәрмәсе аҫтына ташланған осраҡтары билдәле. Шулай булғас, уға яңғыҙ кешең нимә ул? Ярай әле янымда этем бар, тип үҙемде тынысландырған булам, барыбер япа-яңғыҙ һымаҡ түгел. Хафаланып, мин уны эргәмә саҡырҙым: йыртҡыс тешенә тәл булыуы бар.

Күренеп тора алдағы төн буран көслө булған. Көпшәк ҡарҙы борхотоп өргән киҫкен ел таңға ҡарай ғына баҫылды. Урман йәнлеге әле эҙ сығарырға өлгөрмәгән. Тимәк бүре яңыраҡ ҡына уҙған. Ҡапыл ғына һунарсы ҡомары уяныуҙан урманға ни өсөн сыҡҡанымды ла оноттом, буғай, эҙ буйлап киттем. Саңғыларым ярайһы уҡ яҫы булһалар ҙа ултырып өлгөрмәгән өрпәк ҡарҙа ныҡ баталар, барыу ауыр. Уның ҡарауы, ошондай ҡарҙа төлкөһө лә, бүреһе лә үҙҙәренең иҫке эҙҙәренә генә баҫып йөрөргә ярата. Былай енелерәк, көс аҙыраҡ сарыф ителә. Еңелен-еңел дә ул, әммә иҫке эҙ аҫтында ҡапҡан ятыуы бар. Эйе, йышылған һунарсы кейектәрҙең ошо ғәҙәте менән оҫта файҙалана. Әле ҡапҡан менән һунар итеү өсөн уңайлы осор - яңы яуған өлпәрәм ҡар тәрән. Ҡапҡанды урын-еренә еткереп һала белеү генә кәрәк. Бары шул ғына. Бары шул ғына, тиһәм дә, ҡапҡан һалыу - үҙе бер ғилем ул. Тик был турала икенсе юлы, хәҙергә беҙ бүре эҙәрлекләйбеҙ.

Аҡтырнаҡ ярылып ятҡан эҙ буйлап алдан төштө. Бүре еҫе килә! Ҡан дошманының, ҡайҙалыр, яҡында ғына икәнлеген һиҙеүҙән уның елкә йөндәре хәтәр тырпайышҡан, күҙҙәре ут булып яна. Үҙе ара-тирә сыйнаштырып ҡуя. Ҡулымда мылтыҡ булғанда, әлбиттә, уға был иркенлек эләкмәҫ ине. Эт арттан эйәреп кенә килер ине.

Бына бүре йәйәүле кеше анһат ҡына йырып сыға алмаҫлыҡ сәнскеле гөлйемеш ҡыуаҡтары араһына инеп киткән. Мин ҡыуаҡтарҙы урап үттем. Күп тә барманым, ҡарағайлыҡтың ситенә, асыҡҡа урынға килеп сыҡтым һәм... көтөлмәгән күрәнештән шып туҡтап ҡатып ҡалдым. Ваҡ уҫаҡлыҡ эсендә күкшел-һары төҫтәге кейек мөкиббән китеп ниҙер кимерә ине. Бүре бит! Ул әлегә бер ни һиҙмәй ҙә, күрмәй ҙә. Ара ун-ун биш аҙым. Их, мылтыҡ булғандамы! Ә эт ҡайҙа?

Аҡтырнаҡ был мәлдә ҡыуаҡтар араһынан сыҡҡан да, һөмһөҙлөккә ғәжәпләнгән һымаҡ, уяулығын бөтөнләй юғалтҡан бүрегә ҡарап тора. Минең тәнем зымбырлап китте, арҡам буйлап әллә һалҡын, әллә ҡайнар тулҡын үтте. Борсолоуым тиккә түгел: лайкалар улар - ҡурҡыу белмәҫ ауан эттәр. Бигерәк тә айыу, мышы кеүек янарға өйрәтелгәндәре. Әле эт, хужаһы алдында шәбәйеп, йыртҡысҡа ташланған хәлдә өҫтөнлөк, һис шикһеҙ, бүре яғында. Ул күпкә көслөрәк тә, сосораҡ та. Ул - йыртҡыс, ул - ҡырағай кейек.

Этем ниндәйҙер эскерһеҙлек менән миңә мәғәнәле ҡараш ташланы ла, һаҡ ҡына баҫып, әкрен-әкрен генә бүрегә бара башланы - һөжүмгә әҙерләнә, һантый! Мин инде артабан битараф ҡала алманым. Урман яңғыратып ҡысҡырған тауышҡа ҡапылғара ни булып ятҡанлығын аңлап өлгөрмәгән кейек, ҡойроғон бот араһына ҡыҫтырып, яҡындағы һаҙға атылды. Ныҡышмал Аҡтырнаҡ, әлбиттә, уның артынан төштө. Бүрене, ахыры, үҙенән ҡурҡып ҡасты тип уйланы. Ә ҡасҡанды мотлаҡ ҡыуып тоторға кәрәк - эт ҡануны шулай. Теге икәүҙең артынан мин төштөм. Үҙем ҡысҡыра-ҡысҡыра барам, иҫенә килергә өлгөргән бүре әйләнеп эткә ырғылмаһын, тип ҡурҡам. Шулай өсәүләшеп йән фарманға ҡыуышабыҙ ғына. Хәҙер хатта ҡарҙың тәрәнлеге лә, йомшаҡлығы ла беленмәй. Шул ҡәҙәре ҡыҙғанмын. Башымда бары бер генә уй: ҡапыл тертләгән йыртҡыс этемде тәләфләй күрмәһен. Ҡарҙа йөҙөп тиерлек барғанлыҡтан, бүре ыратып китә алмай, ә этҡә күпкә еңелерәк - ул әҙер бураҙнанан саба. Уларҙың араһы күҙгә күренеп ҡыҫҡара төҫлө. Бәлки миңә, этем тип хафаланған кешегә, шулай күренәләр генә. Юҡ, күренмәй, Аҡтырнаҡ бына-бына тегенең ҡойроғона баҫасаҡ! Мәгәр шулай икән, артабанғы хәлдәрҙе күҙ алдына килтереүе лә ҡурҡыныс.

Бәхетебеҙ бар икән: бер аҙҙан бүре, ҡырҡа боролоп, тәрән ҡарлы һаҙҙан сыҡты ла, көбөн тартҡан юлға төштө. Тәпәйе ҡатыға эләккәнен тойған һоро юлбаҫар артабан уҡ ише атылды. Бар, ҡыуып етеп ҡара уны хәҙер. Мин бар көсөнә һыпыртҡан йыртҡысты күреп, һунар итеү дәүеремдә тәүге тапҡыр үкенес тойғоһо кисермәнем. Киреһенсә, оло бәләнән ҡотолғандай, иркен һуланым: этем һау ҡалды. Аҙаҡ аптырап ҡуйҙым: шул мәлдә нисектер үҙем тураһында уйламағанмын. Шулай ҙа бер сама иҫемде йыйғас, анһатты ҡыуып, мылтығымды алмағанға үҙемде-үҙем һуңғы һүҙҙәр менән битәрләнем. Әммә ләкин ни фәтүә - эш үткән. Осраҡтың бындайы - кейектең юлына үҙе сығып торғаны - һунарсы ғүмерендә бер, уҙа барһа, ике тапҡыр булалыр - ошоноһо үкенесле ине.

Бер аҙ тын алғандан һуң йыртҡысты тап иткән урынға ҡабат килдем - кимереп ятҡаны нимә икән? Уныһы әллә ҡасанғы, кибеп бөткән ҡыу һөйәк булып сыҡты. Мин шул ҡәҙәре ҡаты һөйәктә ҡалған теш эҙҙәренә хайран ҡалып та, һоҡланып та ҡарап торҙом. Ҡайһы аралалыр килеп еткән Аҡтырнаҡ һөйәкте еҫкәштерҙе лә, вайымһыҙ ҡиәфәттә артҡы тәпәйен күтәреп, үҙенсә "билдә" һалды. Эт телендә был ҡөҙерле табыш хәҙер уныҡы һанала. Йәнәһе, башҡаса бында яҡын юлайһы булма, бүре!

Ҡайтып барышлай өтөп барған үкенес тойғоһо мине һаман ташламаны. Нисек инде үкенмәйһең? Аслыҡтан аңрайған бүре менән минең ара, ана, күпме генә булған? Ҡаҡ маңлайына төбәп ат та ал. Шулай, аслыҡ уйын эш түгел. Астан кәкерәймәҫ өсөн, мәле менән, ғүмерендә лә ҡурҡыныс аҫтына ҡуяһыңдыр ул. Шуныһы үкенесле - бындай мәлдәр хатта беҙ, кешеләр араһында ла булғылай.

**(Дауамы бар).**

**✓ Ҡымыҙҙағы С витамины иммунитетты нығыта һәм организмдың һаҡланыу функцияларын арттыра, вирустың кире йоғонтоһо менән көрәшергә ярҙам итә. Заманында цинга ауырыуын ҡымыҙ менән юҡҡа дауаламағандар бит.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ХӘРӘКӘТ КӘРӘК!

■ Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк, ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй.

■ Ҡышын да туҡланыу рационында һөт ризыҡтары, йәшелсә-емештәр етерлек булырға тейеш, ти белгестәр. Итте аҙнаһына ике тапҡыр ашарға, ҡалған көндәрҙә балыҡ, сыр, ҡуҙаҡлылар, сәтләүектәр, йомортҡа, эремсек ҡулланырға. Ризыҡ ныҡ эҫе булмаһын, был ваҡытта организм уны һыуытыу өсөн артыҡ энергия сарыф итә. Һалҡын миҙгелдә һыу эсеүҙе кәрәкле тип тапмай күптәр. Диетологтар быны хата ҡараш булыуын белдерә, һалҡын һауа шулай уҡ тиреге киптерә, бындай күңелһеҙлеккә тарымаҫ өсөн һыу эсергә кәрәк. Ҡышын кеше тирләп бармаһа ла, тышта тын алғанда һыу күпләп быуға әйләнә. Ҡәһүәгә ҡарағанда үлән сәйҙәре, морс, компот яҡшыраҡ. Йоҡлар алдынан сәй эсергә була. Емешелләктәргә килгәндә, бананға ҡарағанда әфлисун, мандарин файҙалыраҡ, уларҙа С витамины бар.

■ Стресс гормоны - кортизол баш мейеһе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһап, хәтерҙең насарайыуына килтереүе ихтимал, тип яҙа Neuroscience журналы. Кортизол күләменең бер ваҡытҡа күтәрелеп алыуы һәйбәт, сөнки был мәлдә иғтибар көсәйә, ул кешегә тормош һынауҙарын еңеп сығырға ярҙам итә, тиҙ ҡарарға килеү һәләте барлыҡҡа килә. Әммә был гормондың даими рәүештә юғары кимәлдә булыуы кире эҙемтәләргә килтерә: аш һеңдереү менән бәйле проблемалар килеп тыуа, ауырлыҡ арта, ҡан баҫымы күтәрелә. Ғалимдар билдәләүенсә, стресс гормонының оҙайлы тәьҫире һөҙөмтәһендә баш мейеһенең айырым өлөштәрендә нервы күҙәнәктәре ҡыҫҡара. Айова университеты психологтары фекеренсә, был гормон депрессия йәки хроник стресс кисергән пациенттарҙа осрай һәм улар етди дауалауға мохтаж.

■ Шәкәр иммунитетты ҡаҡшата. 100 грамм шәкәр ҙә (шул иҫәптән фруктоза менән глюкоза ла) ҡандың аҡ тәнсәләренең зыянлы микроорганизмдар менән көрәшеү һәләтен түбәнәйтә. Шәкәр ашағандан һуң ике сәғәт эсендә иммунитет яртылаш ҡына эшләй, ә өс сәғәттән һуң ул эшмәкәрлеген бөтөнләй туҡтата. Был ваҡыт эсендә организм хәлһеҙләнә. Инфекциялы ауырыуҙар менән яфаланыусыларға бөтөнләй татлы ризыҡтар ашарға ярамай. Шулай уҡ һуттар ҙа зарарлы, сөнки уларҙың составында глюкоза бар.

БАШҠОРТ АШ-ҺЫУЫ

**Бер нисә йыл рәттән Башҡортостанда Ҡымыҙсылар һәм йылҡысылар республика конкурсы уҙғарыла килде, һуңынан айырым "Ҡымыҙфест" сараһы барлыҡҡа килде. Быйыл ул эпидемиологик хәл-торош арҡаһында беренсе тапҡыр онлайн форматта уҙасаҡ. Унда барлыҡ ҡымыҙ эшләүселәр ҡатнаша ала. Бының өсөн ҡымыҙ бешеү һәм әҙер продукцияны презентациялау видеояҙмаһын ddnrb-info@mail.ru (телефондар: 276-62-75, 8-987-037-78-69) электрон почтаһына ебәрергә кәрәк. Конкурсҡа килгән барлыҡ эштәр ҙә YouTube-каналында ҡуйылып барасаҡ. Проект башҡорт халҡының боронғо кәсебен һаҡлау һәм үҫтереү, уны әҙерләү буйынса милли йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәтте пропагандалау һәм популярлаштырыуға, "Башҡорт ҡымыҙы" брендын үҫтереүгә йүнәлтелгән. Ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тигәндәй, мәлдән файҙаланып, халҡыбыҙҙың милли ризыҡтарының береһе генә түгел, дауа ысулдарының береһе булған милли эсемлегебеҙ тураһында тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрөп үтеү яҙыҡ булмаҫ, моғайын.**

# ҠЫМЫҘМЫ, ӘЛЛӘ...

## ҡымыҙ эсемлегеме?



### Тарих биттәренән

Мәғлүм булыуынса, бейә һөтөнән әсетеп әҙерләнгән эсемлекте, күсмә, ярымкүсмә халыҡтар эшләргә өйрәнгән һәм уны эшләү ысулын быуаттар буйына сер итеп һаҡлаған. Ҡымыҙҙы дауалау сараһы булараҡ тәүге тапҡыр Әбүғәлисина (Авиценна) үҙенең яҙмаларында теркәп ҡалдыра. Ул бынан мең йыл самаһы элек вәзир Сухайлияны ҡымыҙ менән дауалап, ташын төшөрә. Ағыуланғанда ҡымыҙ ҡулланыу тураһында боронғо дауалау ҡулъяҙмаларында, мәҫәлән, "Прохладный ветроград"та яҙыла. Рус армияһында хеҙмәт иткән шотланд табибы Джон Грив үҙенең Эдинбург короле йәмғиәтенә яҙған отчетында ҡымыҙҙың үҙенсәлектәре һәм уның дауалау тәьҫире тураһында бәйән итә. Шулай уҡ ҡымыҙҙың дауалау сифаттарын Рус армияһында хеҙмәт иткән инглиз табибы Хебер-лейн да теркәп ҡалдырған. Ул туберкулез менән ауырығас, 13 йыл дауамында ҡымыҙ эсеп дауаланған.

Рәсәйҙә иң тәүге ҡымыҙ менән дауалау учреждениеһы Постников Нестор Васильевич тарафынан 1858 йылда Һамар губернаһында асылһа ла, тарихтан мәғлүм булыуынса, был хаҡта иң тәүге мәғлүмәтте Геродоттың яҙмаларында табырға мөмкин. Ул беҙҙең эраға тиклем 484-424 йылдарҙа скифтарҙың ағас батманда ҡымыҙ бешеүҙәре тураһында мәғлүмәт ҡалдырған. Рәсәйҙә "Ипатьевский список" тигән боронғо урыҫ йылъяҙмаһында ҡымыҙ тәүге тапҡыр телгә алына. Ундағы тарихтан күренеүенсә, Игорь Северской ҡыпсаҡтарҙа 1182 йылда әсирлектә булғанда, һаҡсылар ҡымыҙ эсеп йоҡлап киткәс, ҡасҡан. Башҡа йылъяҙмала Тверь кенәзе Михаилды әсир булараҡ ҡымыҙ эсергә мәжбүр итеүҙәре, 1245 йылда Батый хан кенәз Даниил Галицкийҙы ҡымыҙ менән һыйлауы ла телгә алына.

Немец һәм урыҫ сәйәхәтсеһе ғалим-энциклодедист Паллас 1770 йылда: "Башҡорт далаһына ҡымыҙ эсергә Московиянан һәм Дондан төрлө халыҡ йыйыла, сөнки уның һаулыҡҡа файҙаһы бик ҙур", - тип яҙа. Күренекле ғалим, яҙыусы һәм табип Владимир Даль: "Ҡымыҙҙы алмаштырырлыҡ башҡа бер ниндәй ҙә эсемлек тә, ашамлыҡ та табыу мөмкин түгел", - тип теркәп ҡалдыра. Был файҙалы эсемлек тураһында заманында мәшһүр урыҫ яҙыусылары С. Аксаков, Л. Толстой һ. б. үҙ һүҙҙәрен әйтеп ҡалдырған. Улар һаулыҡтары менән ҡымыҙға бурыслылар, тип әйтеү ҙә һис яҙыҡ булмаҫ.

Ҡымыҙҙы пропагандалаусы инглиз Дж. Каррик ҡымыҙ етештереү өсөн хатта башҡорт аттарын Англияға ла алып ҡайта. Әммә унда эшләнгән ҡымыҙҙың сифаты Башҡортостандағынан күпкә ҡайтыш була. Ахырҙа, ҡымыҙ оҫталарын алып барып, ҡымыҙ бешеп ҡарайҙар. Әммә эсемлек башҡорт ерлегендәге кеүек тәмле килеп сыҡмай. Белгестәр бының сәбәбен Башҡортостан ерлегендә үҫкән ҡылғанға һәм башҡа үҫемлектәргә бәйләй. Тап улар башҡорт ҡымыҙына ҡабатланмаҫ тәм бирә, шифалы итә.

### Ҡымыҙҙың файҙаһы тураһында

Бейә һөтөндә витаминдар һыйыр һөтөнә ҡарағанда 10 тапҡырға күберәк. Шулар араһында А һәм Е, В, С төркөмө витаминдары, кальций, фосфор, фолий һәм пантотен кислотаһы бар. Был продукт составында аҡһым - 2, лактоза 1,5 тапҡырға аҙыраҡ. Шул сәбәпле бейә һөтө әсә һөтөнә яҡын. Ошоно иҫәпкә алып, уны балалар өсөн аҙыҡ әҙерләүҙә ҡулланалар ҙа инде. Был продуктта булған аҡһым тиҙерәк һәм яҡшыраҡ үҙләштерелә. Ысын ҡымыҙ - ҡиммәтле, әммә үҙенсәлекле тәме булған эсемлек. "Тере" ҡымыҙҙы оҙаҡ һаҡлап булмай, тимәк, уны сәнәғәт күләмендә етештереү ҙә мөмкин түгел.

**Иммунитетты нығыта.** Ҡымыҙҙағы С витамины иммунитетты нығыта һәм организмдың һаҡланыу функцияларын арттыра, вирус һәм инфекцияларҙың кире йоғонтоһо менән көрәшергә ярҙам итә. Юҡҡа ғына заманында цинга ауырыуын ҡымыҙ менән дауаламағандар бит.

**Тештәрҙе һәм һөйәктәрҙе нығыта.** Боронғо эсемлектә организмдың эшмәкәрлеге өсөн мөһим макроэлементтар - кальций һәм фосфор бар.

**Ҡан йөрөшөн яҡшырта.** Ҡымыҙ составында булған Е витамины атеросклероз менән көрәшеү һәләте бирә, ҡандағы холестерин күләмен кәметә. Борон хатта аҙ ҡанлылыҡты ла ҡымыҙ менән дауалағандар.

**Нервыларҙы нығыта.** Был эсемлектә нервылар системаһына ыңғай йоғонто яһаусы тиамин (В1) бар.

**Потенцияны яҡшырта.** Ир-ат өсөн яҡшы мәғлүмәт - ҡымыҙ ирлек ҡеүәтен арттыра. Шулай уҡ был эсемлек ағзаларҙың регенерацияһы процестары ағышын яҡшырта.

**Гастриттан дауалай.** Ҡымыҙҙы ашҡаҙан сей яраһы, ашҡаҙан аҫты биҙен дауалағанда уңышлы ҡулланалар. Был уның составында пантотен кислотаһы булыуы менән аңлатыла. Шулай уҡ ҡымыҙ аҙыҡ-түлек менән ағыуланғанда ла килешә.

**Тирене яҡшырта.** Был бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ өсөн файҙалы - ҡымыҙ тирене йәшәртә. Уның нигеҙендә бит тиреһе өсөн туҡландырыу битлектәре яһайҙар.

**Кәйефте күтәрә.** Ғалимдар бейә һөтөндә кешелә шатлыҡ тойғоһо уятыусы витаминдар таба. Быны уның составында В1 (тиамин) витамины булыуы менән дә аңлатырға мөмкин, сөнки тиаминды "оптимизм витамины" тип йөрөтәләр. Ул организмдың һәм буйҙың нормаль үҫешенә, йөрәк-ҡан тамырҙары һәм аш эшкәртеү системалары эшмәкәрлегенә ярҙам итә, майҙарҙы һәм углеводтарҙы үҙләштереү процесында ҡатнаша.

**Туберкулезды дауалай.** XIX быуат уртаһында медиктар үпкә ауырыуҙарын дауалағанда ҡымыҙ ҡуллана башлай. Сихут сирлеләргә, әгәр ул аҙып китмәгән булһа, табиптар ҡымыҙ тәғәйенләй һәм 2-3 ай даими ҡулланғандан һуң, был сир юҡҡа сыға.

**Яман шеште профилактикалау сараһы булып тора.** Шулай уҡ ҡымыҙҙа фолий кислотаһы бар, ул шештәр барлыҡҡа килеүен профилактикалай. Ҡаҙағстандың Туҡланыу академияһы белгестәре хатта бейә һәм кәзә һөтөнән әҙерләнгән ризыҡтарҙы химия терапияһы үткән онкологик сирлеләрҙең туҡланыу рационына индерергә тәҡдим итә.

### Теманы дауам итеп...

**Бөгөн дә республиканың бик күп райондарында йәйге миҙгелдә ҡымыҙ бешәләр, шулай уҡ унан порошок эшләп, ҡыш көнө лә файҙаланалар. Әммә порошок ҡымыҙы йәйге ҡымыҙға етмәй. Әйткәндәй, әлеге ваҡытта ҡымыҙҙың ниндәйе генә юҡ: бейә ҡымыҙы, кәзә ҡымыҙы, һыйыр һөтөнән ҡымыҙ, ыҫланған ҡымыҙ һ.б. Әммә уларҙың барыһы ла ҡымыҙмы һуң?**

***Азамат БУКАНОВ, "Башҡортостан ғилми-етештереү ветеринария лабораторияһы" ДБУ-һының директор урынбаҫары:*** Күптәр тармаҡ стандартына (ОСТ) һылтанып, кәзә һөтөнән эшләнгән ҡымыҙ эсемлектәренең ярлығына "Ҡымыҙ" тип яҙа ла ҡуя. Был дөрөҫлөккә тап килеп етмәй. ОСТ стандарттарына һылтаныу - бер, ә был эсемлектең 33-сө регламент талаптарына яуап биреүе - икенсе һәм мөһимерәк мәсьәлә. Әммә күптәр был регламентты белмәй, ә уның урынына элегерәк ғәмәлдә булған, әммә хәҙер ғәмәлдән сығарылған 88-се регламентты нигеҙ итеп ала. 33-сө регламентта ҡымыҙ һәм ҡымыҙ эсемлеге ике төрлө эсемлек булараҡ билдәләнә. Ҡыҫҡаса әйткәндә, яңы регламент буйынса бейә һөтөнән бешелгән эсемлек - традицион рәүештә "ҡымыҙ" тип, ә кәзә, һыйыр һөттәренән әсетеп яһалған эсемлек иһә "ҡымыҙ эсемлеге" тип аталырға тейеш.

Ҡымыҙ һәм ҡымыҙ эсемлектәре менән сауҙа итеүселәр ошо хаҡта иҫтәренән сығармаһын ине. Сөнки барыһын да ысын ҡымыҙ тип атау һатып алыусыларҙың бер ни тиклем башын бутау ул. Сөнки теләһә ниндәй ҡымыҙ эсемлеге файҙаһы буйынса ысын ҡымыҙ менән ярыша алмай. Ысын ҡымыҙҙа пектин кислотаһы бар, ә ул бары тик бейә ҡымыҙында ғына барлыҡҡа килә. Башҡа һөттән бешелгән ҡымыҙҙа ул булмай. Пектин организмға зыян килтерә торған бактерияларҙы юҡ итә, ә файҙалы микрофлораны тере ҡалдыра. Тимәк, ул төрлө ауырыуҙарға ҡаршы көрәшә. Тәү сиратта, әйтәйек, ашҡаҙан, үпкә ауырыуҙарынан яфаланғандарға ярҙамға килә. Бейә ҡымыҙындағы был файҙалы матдә туберкулез сиренән дә һаҡланырға ярҙам итә.

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҠОРБАН ҒӘЙЕТЕ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!

**Кешегә һәр төрлө бәлә-ҡаза, ауырлыҡтар килһә, уны ниндәйҙер гонаһы өсөн Аллаһы Тәғәлә ебәргән яза, тип кенә уйлаусылар күп. Бында ла дөрөҫлөк бар, әммә беҙгә Раббыбыҙ әленән-әле Үҙенең һынауҙарын да төшөрөп тороуы хаҡында белеү кәрәк. Иңебеҙгә төшкән һәр һынауын ризалыҡ менән ҡабул итеп, лайыҡлы үткәргәнебеҙ өсөн Хаҡ Тәғәлә беҙгә әжерен дә бирә. Вәғәҙә иткән сауаптарын ҡасан һәм нисек итеп ҡайтарып биреүе (донъяламы, Ахирәттәме) Аллаһы Тәғәләнең Үҙ ихтыярында. Уға фәҡәт ышаныу һәм өмөт итеү генә кәрәк. Бәйғәмбәребеҙҙең "Сәнскәккә сәнселеп алыу ҙа мосолман кешеһе өсөн хәйерле", тигән мәғәнәле хәҙисе лә бар.**



Әҙәм балаларына хаҡ диндә өйрәтер өсөн төрлө дәүерҙә ебәрелгән һәммә бәйғәмбәрен Аллаһы Тәғәлә айырыуса ауыр һынауҙар менән һынаған. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең: "Һеҙгә ниндәй генә ауырлыҡ килһә лә, һәр саҡ мине иҫләгеҙ. Миңә төшкән һымаҡ ауыр һынау берегеҙгә лә төшмәйәсәк", - тигән хәҙисе бар. Әленән-әле булып торған михнәтле сир өйәнәктәре, сабыйҙарының үлемен, дин дошмандарының ҡылған бихисап яуызлыҡтарын һәр саҡ үҙ иңендә кисереп йәшәүе һәм башҡа күп ауырлыҡтарҙың ғүмер буйы оҙатып барыуы - Раббыбыҙҙың Үҙ илсеһенә ебәреп торған ололарҙан-оло һынауы, тип ҡарау кәрәк. Унан алда йәшәгән бәйғәмбәрҙәр араһында булған Йосоп ғәләйһис-сәләмдең дә ғәйәт ҙур һынауҙар аша үтеүе хаҡында беләйек. Ағайҙары тарафынан ҡоҙоҡҡа ташланып, унан ҡотолғас, оло дәрәжәләргә ирешкәндән һуң да, үҙен ҡыйырһытыусы (хатта үлтерергә теләүсе) ағаларына миһырбанлыҡ, киң күңеллелек күрһәтә ул. Бынан тыш, ғәйәт матур йөҙлө итеп яралтылған был бәйғәмбәр һылыу-һылыу бай ҡатын-ҡыҙҙарҙың зинаға ылыҡтырыуынан баш тартырға көс табып, Аллаһ Тәғәләнең ҡаршында оло дәрәжәгә ирешә һәм шуның менән дә әҙәм балаларына үрнәк булып тора.

Бәйғәмбәр Ибраһим ғәләйһис-сәләм хаҡында ла ишетмәгән кеше юҡтыр. Уны ла имеш-мимеш, йә әкиәт икән тип уйлау ярамай. Кафырҙар аяҡ-ҡулын бәйләп, утта яндырырға маташҡанда ла ул үҙен ҡотҡарыуҙарын һорап дошмандарға ялбармай, ә фәҡәт Аллаһ Тәғәләнең Үҙенә генә тәүәккәллек ҡыла. Ошо һынауын оло сабырлыҡ менән үткәргәс, Раббыбыҙ уға әжерен бирә: утты һүндереп, бәйғәмбәрҙе ҡотҡара. Был хаҡта Ҡөрьән аяттары ла бар. **Ибраһим бәйғәмбәргә төшкән ауырҙарҙан-ауыр тағы бер һынау Ҡорбан ғәйетенең килеп сығыу тарихы менән бәйле.** Әллә күпме йылдар хәләл ефете менән бергә йәшәп, бала-сағалары булмаған Ибраһим бәйғәмбәр инде оло ғына йәштәргә еткәс, Аллаһ Тәғәлә унын ҡатынының ауырға уҙыуын насип итә. Ир балалары тыуғас, ифрат ныҡ көтөп алынған ғәзизенә Исмәғил тип исем бирә бәйғәмбәр. Ә инде улы үҫеп етеп килгәндә Аллаһ Тәғәләнән ана шул берҙән-берен ҡорбан итергә бойороҡ ала. Әҙәм балаһының хәленән килмәҫтәй бындай һынауҙар, әлбиттә, тик бәйғәмбәрҙәргә генә ебәрелгән. Бында Раббыбыҙ буласаҡ бәйғәмбәре - Исмәғилдең тәҡүәлеген дә бер юлы һынай. Хаҡ Тәғәләгә ныҡ ышанған Исмәғил дә үҙенең ҡорбан булырға тейешлеге менән килешә ("Атайың һине ҡорбан итергә алып китеп бара бит!" тип үҙенә үәсүәсә ҡылырға маташҡан шайтанға бер нисә мәртәбә таш атып, ҡыйыу малай уны ҡыуып ебәрә. Мәккәгә хаж ҡылған мосолмандарҙың таш атыу йолаһы ла ана шунан килеп сыҡҡан). Фәҡәт Үҙенә итәғәт иткән Ибраһимдың, уның улы Исмәғилдең ошо бойороҡто үтәргә әҙер булыуҙарын һынап ҡарағас, Раббыбыҙ уларға ҡорбан итеп салырға ҡусҡар тәкә ебәрә.

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм йылына ике байрамды билдәләргә ҡушҡан: Ураҙа-байрам һәм Ҡорбан байрам. Әле етеп килгән Ҡорбан байрамды бөтөн донъя мосолмандары оло шатлыҡ менән ҡаршы ала. **Ул - Зөлхизә айының 10-сы көнөндә билдәләнә, Хаж ғәмәлдәре тамамланыу айҡанлы үткәрелә торған байрам.** Өс көн дауам итә ул. Ҡорбан салыу - үәджиб (мотлаҡ) түгел, әммә бик сауаплы сөннәт ғәмәл. Изге ниәт менән ҡорбан салып, уның итен мохтаждарға таратып биреү, бер-береңде хөрмәт итеү - илдә ғәҙеллек һәм тыныслыҡ, мосолмандар араһында туғанлыҡ хистәре, татыулыҡ, миһырбанлыҡ тәрбиәләүгә лә оло сәбәп булып тора. Бер аятта әйтелгәнсә, Аллаһҡа ҡорбанға салынған малдың ите лә, ҡаны ла барып етмәй. Ул быға мохтаж түгел! Уға беҙҙең ихласлығыбыҙ, әжер-сауап алырға өмөтөбөҙ һәм изге ниәттәребеҙ генә барып етә. Раббыбыҙға итәғәтлек йөҙө менән малыбыҙҙы сарыф итеү, йәғни ҡорбан килтереү ғибәҙәте - беҙгә, әҙәм балаларына Уның тарафынан ебәрелгән һынауҙарҙың береһе ул.

**Ҡорбан салыусы ниндәйерәк кеше булырға тейешлеге хаҡында ла йыш ҡына һорау бирәләр.** Салған малдың ите хәләл булһын өсөн ҡорбан ғына түгел, ғөмүмән, мал боғаҙлаусы кешенең Аллаһы Тәғәләгә иман килтергән, йәғни шәһәҙәт ҡылған кеше булыуы - мотлаҡ (шәһәҙәт ҡылыу рус теленә "засвидетельствовать" тип тәржемәләнә). Күңелдән ышанып, "Әшһәдү әл-лә иләһә иллә Аллаһү үә әшһәдү әннә Мөхәммәдән ғәбдүһү үә расүлүһ", тип әйтмәй тороп, бер кеше лә мосолман булмай. Мәғәнәһе: "Аллаһтан башҡа ғибәҙәткә лайыҡ бер илаһ та юҡ һәм Мөхәммәд - Уның ҡоло һәм илсеһе тип таныҡлыҡ ҡылам". Үкенескә, күп кенә яҡташтарыбыҙ ошо хаҡта белмәй һәм имамдарыбыҙҙан уны өйрәнергә лә тырышмай. Был - бик мөһим мәсьәлә.

**Икенсенән, мал салыусы ғөсөллө (махсус рәүешле йыуынған) булырға тейеш.** Шулай уҡ боғаҙлаусы кеше "Бисмилләһи Аллаһү Әкбәр" (Иң бөйөк булған Аллаһ исеме менән) тип әйтергә тейешле. Сөнки Аллаһ исемен иҫкә алмай салған малдың да ите хәләл булмай. Ҡорбанлыҡты ауыл имамынан йә иһә намаҙ уҡыған башҡа кешеләрҙән салдырыу хәйерлерәк. Намаҙҙа булған кеше көнөнә әллә нисә мәртәбә (тәһәрәт алған, намаҙ уҡыған һайын) шәһәҙәт ҡыла һәм ул һәр саҡ мотлаҡ ғөсөллө була. Мин йәшәгән ҡасабала кешеләр, ғәҙәттә, үҙҙәренең ҡорбанлығын намаҙ уҡыусы кешенән салдырыу ниәте менән мәсет ишеге алдында ғәйет намаҙы тамамланғанын көтөп тора. Тик шуны әйтеү кәрәк: ғаиләләребеҙҙәге балиғ булған һәр ир-егеттең бына ошо яуаплы эште атҡарырлыҡ хәлдә булыуы хәйерлерәк.

Бәғзе берәүҙәр мал боғаҙлаусы ирҙәрҙең "сөннәтле" булыу мотлаҡлығы хаҡында ла һүҙ йөрөтә, әммә шәриғәттә бындай ҡәтғи талап юҡ. Ә ҡорбанлыҡ хайуандың һаусәләмәт, һәр ағзаһы ла теүәл булыуы, уның билдәле йәшкә етеүе шарт (һарыҡ малы - ярты йәштән, һыйыр малы - ике йәштән дә кәм булмаҫҡа тейеш). Үҙеңдең йә иһә башҡа ҡорбан салдырыусы кеше исеменән, шулай уҡ, баҡыйлыҡтағы берәй туғаның исеменән салыу рөхсәт ителә. Әммә ҡорбан фәҡәт Аллаһ Тәғәләнең ризалығы өсөн генә ниәтләп салынырға тейеш (ниндәйҙер әруах, хатта бәйғәмбәр йә берәй әүлиә ризалығы өсөн түгел). Ҡорбан итен өс өлөшкә бүлеү кәңәш ителә. Бер өлөшөн ғаиләһенә ҡалдырыу, икенсе өлөшөн туған-тыумасаларына өләшеү, өсөнсө өлөшөн мохтаждарға биреү тейешле. Оло байрам менән, ҡәҙерле диндәштәр!

**Хөрмәтулла ҠЫУАНДЫҠОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 31-се идея Аласыҡмы, әллә һараймы?

Бөгөн һин көнөндө кемдәр араһында, ниндәй шарттарҙа үткәрергә йыйынаһың? Һине уратып алыусылар сағыу һәм бәхетлеме әллә ҡыҙыҡһыҙ һәм бойоҡмо?

Чарльз Кингслиға бер ваҡыт Гималайҙа йәшәгән дуҫы килә. Кинглиҙың бәләкәй генә ауылдағы бәләкәй генә коттеджына килеп ингәс, дуҫы ҡарт, шәфҡәтле Чарльз Кингслиҙы бик йәлләй һәм уға: "Икһеҙ-сикһеҙ донъяла беҙҙең тирәләй, юлбарыҫтарға һунарсылыҡ итеү кеүек, ғәжәйеп хәлдәр булып ятҡанда был бәләкәй генә йортта, кешегә ҡатнашмай айырым ғына йәшәп ятыуы бик күңелһеҙҙер инде", - ти. Кингсли уға тыныс ҡына йылмайып ҡарай ҙа: "Беләһеңме, дуҫым, мин күптән инде торлағымдың минең өсөн йә зинданға, йә ҙур һарайға әүереләсәген аңлағанмын. Аллаға шөкөр, мин дөрөҫ юл һайланым, һәм Ул минең йортомдо күркәм һарайға әйләндерҙе", - тип яуап бирә.

Яңы көнөңә әҙерләнгәндә ошо турала уйлан. Көн һайын эшләгән йортоңда артабан да эшләргә йыйынаһыңмы? Көн һайын йөрөгән шул уҡ офисҡа йәки шул уҡ магазинға барырға йыйынаһыңмы? Тағы бер тапҡыр күҙ һал. Күҙҙәреңде ас. Улар үҙенән-үҙе генә булмай. Уларҙың нисек бар, шулай булыуында һинең, һәм бары тик һинең генә көсөң һалынған.

Һин үҙ йортоң тураһында күнегелгән ҡәҙимге бер нәмә кеүек уйлай башланыңмы? Башҡа төрлө итеп уйларға ваҡыт. Үҙ уйыңдың көсө менән уны һарайға әйләндер. Уны йыу, таҙарт, шымарт һәм уға үҙ һарайың итеп ҡара. Ә офисың? Ул һинең өсөн ялҡытҡыс, күңелһеҙ урынға әйләндеме? Тағы бер ҡара. Үҙ офисыңа ғүмереңдең бер өлөшөн үткәргән һарай итеп ҡара, һәм уны ошо ҡиммәтле ғүмереңә лайыҡлы хәлгә килтер.

Һин үҙ тормошоңдо һәм тирәйүнеңде үҙең ижад итәһең. Һине кемдәр уратып алырын һин үҙең генә хәл итәһең.

Бөгөн һин үҙ йортоңда, офисыңда, класыңда, үҙ магазиныңда нимә күрергә йыйынаһың? Һин уларҙы матур һарайҙарға әйләндерә алаһың, сөнки уларҙы аласыҡ йәки һарай итеү һинең генә көсөңдән килә, һинең генә ихтыярында. Үҙеңдең ижади хыял көсөңдө файҙалан. Үҙ аңыңдың көсөн ижади файҙалан, һәм был көндө батша һарайында йәшәп уҙғарырһың.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



### 27 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
23.30 Д/ф "Великий Северный путь". К 175-летию Русского географического общества. [12+]
3.20 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.20 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Ласточка". [12+]
1.25 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]

### БСТ
**7.00 Профилактика на канале с 07.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**17.30 "Пофутболим". [12+]**
**18.00, 5.00 "Бай бақса". [12+]**
**18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Москва-Васютки". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**4.30 Үткән гүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 28 ИЮЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.30 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
23.30 Д/ф "Призраки острова Матуа". К 175-летию Русского географического общества. [12+]
2.50, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.20 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Ласточка". [12+]
1.25 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [6+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 Мусорная реформа. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 По сути дела... [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Зятек". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Не ломайте крылья". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Күстәнәс. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 29 ИЮЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
23.30 Д/ф "Затерянный мир Балтики. Гогланд". К 175-летию Русского географического общества. [12+]
2.45, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.20 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Ласточка". [12+]
1.25 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**2.45 Спектакль "Девушка с веснушками". [12+]**
**4.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**4.45 Уфа. Живое. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 30 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.20 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
23.30 Премьера. "Гол на миллион". [18+]
2.35, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.20 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Ласточка". [12+]
1.25 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай бақса". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Спектакль "Бесталанная". [12+]**
**2.45 Спектакль "Пылкие любовники". [12+]**
**4.30 "Праздник веры и добра!" Концерт. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 31 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.05 Новости.
9.20, 2.50 Модный приговор. [6+]
10.25 Жить здорово! [16+]
11.25 "Курбан-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
12.15 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.35 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Д/ф Премьера. "Неизвестный Якубович". [12+]
19.40 "Поле чудес". Специальный выпуск к 75-летию Леонида Якубовича. [16+]
21.00 Время.
21.30 "ДОстояние РЕспублики". Лучшее. К 25-летию Первого канала. [12+]
23.30 Х/ф "Кикбоксер возвращается". [18+]
1.30 Большие гонки. [12+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Праздник Курбан-Байрам. Прямая трансляция.
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 "Юморина". [16+]
23.00 "Новая волна. Лучшее".
1.00 Шоу Елены Степаненко. [12+]
2.00 Х/ф "Наследница". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "С праздником Курбан байрам!" Концерт.**
**8.00, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15, 17.15, 4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**8.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**9.00 "Курбан-байрам". Прямая трансляция из Уфимской соборной мечети Ляля-Тюльпан.**
**10.00 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**11.00 "Праздник веры и добра!" Концерт. [12+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 5.00 Башкорттар. [6+]**
**13.00 "Иман нуры". Концерт. [12+]**
**13.45, 4.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**15.45 "Музыка ветра". Концерт группы "Курайсы" Роберт Юлдашев и "Guzal-dance" company. [12+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 "Башкорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.00 "Курбан-байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети Ляля-Тюльпан. [0+]**
**21.00 Башкорттар. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Уфа. Живое. [12+]**
**0.15 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]**
**3.00 Спектакль "Кьоджинские перепалки". [12+]**
**5.30 "Наука 102". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

### 1 АВГУСТА СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
7.50 Х/ф "Дедушка моей мечты". [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Олимпиада-80. Больше, чем спорт". [12+]
11.20, 12.15 "Олимпиада-80". Церемония открытия. [0+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
13.30, 15.15 Д/ф "Олимпиада-80". "О спорт, ты - мир!" [12+]
16.45 "Олимпиада-80". Церемония закрытия. [0+]
18.00 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Олимпиада-80". "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Премьера. Юбилей группы "Цветы" в Кремле. [12+]
1.15 Большие гонки. [12+]
2.30 Модный приговор. [6+]
3.15 Давай поженимся! [16+]
4.40 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 "Сто к одному".
11.00, 20.00 Вести.
11.30 "100ЯНОВ". [12+]
12.30 "Доктор Мясников". [12+]
13.40 Х/ф "Мой близкий враг". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Синее озеро". [12+]
1.20 Х/ф "Пока живу, люблю". [12+]
4.23 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Йәйләү". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00, 4.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**13.15, 20.15 Земляки. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**17.30 Концерт НСО РБ. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 Спектакль "Наследство". [12+]**
**0.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**1.30 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**4.15 "Башкорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

### 2 АВГУСТА ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Т/с "Тонкий лед". [16+]
8.10 Х/ф "В зоне особого внимания". [0+]
10.10 "Жизнь других" . [12+]
11.15, 12.15 "Видели видео?" [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.50 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [6+]
15.00 Большой праздничный концерт ко Дню Воздушно-десантных войск. [12+]
16.30 Д/ф Премьера. "Я - десант!" [12+]
17.20 "Русский ниндзя". [12+]
19.15 "Три аккорда". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Налет". [16+]
23.30 Премьера. "Щас спою!" [12+]
0.45 Большие гонки. [12+]
1.55 "Моя мама готовит лучше!" [0+]
2.45 Модный приговор. [6+]
3.30 Давай поженимся! [16+]
4.10 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1
4.25, 1.00 Х/ф "Мой папа лётчик". [12+]
6.00, 2.40 Х/ф "Серебристый звон ручья". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Устами младенца".
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 "Сто к одному".
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Т/с "Впереди день". [12+]
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.15 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Моя вершина. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Книга сказок". [0+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 Башкорттар. [6+]**
**15.30 Д/ф "Мы - одна семья". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00, 1.30 "Вернусь..." Литературно-музыкальный вечер, посвященный 90-летию народного поэта РБ Рами Гарипова. [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30, 3.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 Спектакль "Семейный портрет с посторонним". [12+]**
**4.00 "Наука 102". [12+]**
**4.30 "Млечный путь". [12+]**

***✓ Хыянат үҙе үк мөхәббәт тураһында һөйләй. Былай таныш ҡына булған кешегә хыянат итеп булмай бит.***

***(Марина Цветаева).***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҒАИЛӘ - УЛ КӨС ТУПЛАУСЫ НУР-ЙОМҒАҠ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**29-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Турта. Ҡашғари. Кәрлә. Көрәш. Алмас. Тараҡан. Ғәниева. Түләк. Мадьяр. Елкән. Ата. Мәҙәк. Рәми. Әжәл. Шытым. Ҡарар. Рәшә. Туҡмас. Рәүеш. Бикбаев. Рента.

**Вертикаль буйынса:** Ғүмер. Кондуктор. Ейәнсәр. Ҡеүә. Тамбур. Штамп. Түшәк. Аслыҡ. Макбет. Реальгар. Ра. Әсәһе. Алиһә. Ваҡ. Ант. Мишәр. Үпкә. Әлтә. Сик. Көмөш.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# МУТТАР АҠСА ҺУРА



**Даими иҫкәртеп тороуға ҡарамаҫтан, граждандар мут әҙәмдәрҙең тоҙағына эләгеп тора.**

Республикала 70 йәштәге бер ханым телевизор ҡарағанда ауыр хәлдә ҡалыусыларға ярҙам итеү тураһындағы иғланды күреп ҡала. Ҡыҙын "йәшел йылан" тырнағынан ҡотҡарыу хаҡына ул "дауалаусыларға" шылтырата. "Экстрасенстар" уның проблемаһы бөтәсәген, балаһы алама ғәҙәттән арынасағын белдерә. Муттар бер нисә ай дауамында ҡатын менән бәйләнешкә сыға, ритуалдар үткәрә һәм телефон аша күрһәтмәләр бирә. Хәйләһеҙ ҡатын уларҙың барлыҡ ҡушҡанын да үтәй һәм һәр сеанс өсөн аҡса күсерә. Дөйөм алғанда ул "экстрасенстарға" миллион һумдан ашыу аҡса күсерә, бының өсөн хатта банктан кредит та ала. Мут әҙәмдәр артабан да унан аҡса һурыр ине, әгәр ҡатын был хәл тураһында туғандарына һөйләмәһә. Улар тиҙ генә полицияға мөрәжәғәт итергә кәңәш бирә.

Әлеге ваҡытта был факт буйынса енәйәт эше ҡуҙғатылған һәм хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре енәйәт ҡылыусыларҙы эҙләү эшен алып бара. Полиция республика халҡын уяу булырға, оло йәштәге туғандар һәм таныштарын мут әҙәмдәр ҡулланған тоҙаҡҡа эләкмәһен өсөн иҫкәртеп торорға саҡыра. Мутлашыусылар үҙҙәрен банк ойошмаһы, коммуналь, социаль хеҙмәттәр хеҙмәткәрҙәре, шулай уҡ экстрасенстар йәки дауалаусылар тип танытырға мөмкин.

**Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса идаралығы матбуғат хеҙмәте.**

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

# МИНДЕК БӘЙЛӘЙ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?



**Миндек бәйләү - үҙенә күрә бер сәнғәт ул. Тоторға уңайлы булһын, япрағы файҙалы матдәләрҙе һаҡлаһын, йомшаҡ булһын тиһәгеҙ, ваҡытын, урынын һәм ниндәй ботаҡты алырға кәрәклеген белеү мөһим.**

Эксперттар миндекте июндең 15-тәренән һуң июлдең яртыһына тиклем бәйләргә кәңәш итә. Был ваҡытта ҡайын сәскә атып, алҡаһын ҡоя, япрағы файҙалы матдәләр һәм эфир майҙары менән тулылана. Климатҡа ҡарап, әлбиттә, ҡайын төрлө ваҡытта сәскә атыуына, ҡойоуына иғтибар итергә кәрәк.

**Ҡайын миндеген әҙерләгәндә түбәндәге ҡағиҙәләрҙе үтәгеҙ:**

- Ағастың аҫҡы өлөшөндәге һығылмалы ботаҡтарҙы ғына һындырығыҙ.
- Быға тиклем бер тапҡыр ҙа сәскә атмаған йәш ҡайынға өҫтөнлөк бирегеҙ.
- Ботаҡты уртаса 50 сантиметр оҙонлоҡта өҙөгөҙ.
- Юл буйындағы, сәнәғәт предприятиеһы янындағы ҡайынды һындырмағыҙ. Урман эсендәге, йылға, күл эргәһендәге ағастан һындырығыҙ.
- Япрағы йомшаҡ, ҡул менән һыйпағанда ҡытыршыраҡ булһын.
- Миндекте көн ҡоро булғанда әҙерләгеҙ. Еүеш булһа, төҫө үҙгәреп кибә, йомарлана, тиҙ ҡойола.
- Көндөң тәүге яртыһында, айырыуса иртәнге 9-ға тиклем өҙөү яҡшыраҡ.
- Ботаҡты һаҡлыҡ менән генә һындырығыҙ.
- Миндекте тотоуы уңайлы булһын өсөн һабын яҡынса 15 сантиметр тирәһе ваҡ ботаҡтан, япраҡтан таҙартығыҙ. Эрерәген - уртаға, эргә-тирәһенә вағыраҡтарын йыйып, япраҡтың уң яғын тышҡа ҡаратып бәйләгеҙ.
- Еләҫ, ҡояш төшмәгән урында киптерегеҙ.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Июль - Август (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 27 (6) дүшәмбе | 3:50 | 5:20 | 13:30 | 19:54 | 21:24 | 22:54 |
| 28 (7) шишәмбе | 3:51 | 5:21 | 13:30 | 19:52 | 21:22 | 22:52 |
| 29 (8) шаршамбы | 3:53 | 5:23 | 13:30 | 19:50 | 21:20 | 22:50 |
| 30 (9) кесе йома | 3:55 | 5:25 | 13:30 | 19:48 | 21:18 | 22:48 |
| 31 (10) йома | 3:57 | 5:27 | 13:30 | 19:47 | 21:17 | 22:47 |
| 1 (11) шәмбе | 3:58 | 5:28 | 13:30 | 19:45 | 21:15 | 22:45 |
| 2 (12) йәкшәмбе | 4:00 | 5:30 | 13:30 | 19:43 | 21:13 | 22:43 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# КАРТУФ СӘСКӘҺЕН ЙЫЙ

Картуф сәскәһененең шифаһы тураһында ишеткәнегеҙ барҙыр. Уны яман шеште иҫкәртеү өсөн дә ҡулланалар. Сәскәне йыйып, бер-береһенә теймәҫлек итеп йәйеп һалығыҙ һәм күләгәлә киптерегеҙ. 1 ҡалаҡ кипкән сәскәне 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп бешерегеҙ һәм һыуымаҫ борон, ашарға 20-30 минут ҡалғас, көнөнә өс тапҡыр 1/3 стакан эсегеҙ. Көн һайын яңы порция бешерегеҙ. Эсеүе ҡыйын булһа, һөт, компот ҡушырға була. Дауаланыуҙы дүрт ай дауам итегеҙ һәм бер ай туҡтатып тороғоҙ ҙа артабан эсегеҙ.

**Туҡтап торған ваҡытта түбәндәгесә әҙерләнгән төнәтмә файҙалы:** 100-әр грамм ҡайын, ҡарағай бөрөһө, бер ус юл япрағы, меңъяпраҡ, кесерткән, гөлйемеш, зверобойҙы эмаль һауытҡа һалып, 3 литр һыу ҡойоп, 1 сәғәт ҡайнатығыҙ ҙа, өҫтөн ябып, 24 сәғәткә ултыртып ҡуйығыҙ. Аҙаҡ марля аша һөҙөп, быяла һауытҡа ҡойоғоҙ. Шунан 850 грамм бал, ярты литр ҡырғыстан үткәрелгән алоэ, 1 литр коньяк (йәки 0,5 литр медицина спирты), ярты флакон әрем төнәтмәһе, 250 мл чага ҡушып, бөтәһен бергә яҡшылап бутағыҙ ҙа, ҡараңғы һалҡын урында өс тәүлек төнәтегеҙ. Көнөнә дүрт тапҡыр, ашарҙан 15-20 минут алда, 1-әр ҡалаҡлап эсегеҙ. Дауаланырҙан алда врач менән кәңәшләшегеҙ.

АФАРИН!

**Республикала милли костюм йәки милли үҙенсәлек һалынған кейем кейгән кешене күреү береһе өсөн дә яңылыҡ түгел. Һуңғы йылдарҙа байрамдар, һабантуй, милли сәхнә һәм тамаша сиктәренән сығып, яйлап эшлекле даирәләргә лә, рәсми сараларға ла үтеп инде ул.**

**Күптән түгел мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәрен бүләкләү тантанаһында дәүләт наградаларына лайыҡ булғандар араһында ла күп ине ундайҙар. Быға Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров та иғтибар итте һәм милли костюмдарҙағыларҙы күреү уға шатлыҡ тойғоһо биреүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Әйткәндәй, Рәсәй көнөнә арналған байрам сараһында республика етәксеһе үҙе лә Өфө модельеры Радик Хәйруллиндың боронғо башҡорт хәрбиҙәренең кейеменә оҡшатып теккән пинжәгендә ине.**

**Стилләштерелгән, замансалаштырып, милли элемент һалып тегелгән кейемдәгеләрҙе урамда ла йыш осратырға мөмкин бөгөн. Улар әллә ҡайҙан күҙгә салына. Бер ҡараш ташлау менән уның башҡорт ҡыҙы йәки улы икәнлеген, уның үҙенең сығышы, тарихы, мәҙәниәте менән ғорурланыуын белергә була. Милли кейемде иҫкелек ҡалдығы тип иҫәпләгәндәр арабыҙҙа һирәгәйгәндән-һирәгәйә барыуын түбәндәге фекерҙәрҙән дә белергә мөмкин.**

# МИЛЛИ КЕЙЕМЕБЕҘҘӘ...

## рухи байлығыбыҙ





***Гөлсөм ХИСАМЕТДИНОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Мәләүез районы:*** Халҡыбыҙҙың милли кейеме көндәлек тормошобоҙға ныҡлы үтеп инде, тиһәк, бер ҙә арттырыу булмаç. Был бик тә ҡыуаныслы, сөнки халҡыбыҙҙың милли костюмы - рухи мираçыбыҙ ул. Унда беҙҙең атай-олатайҙарҙың бөтә күңел зауығы, донъяға ҡарашы, тарихы, мәҙәниәте бермә-бер сағыла. Йылдар дауамында улар, әлбиттә, ҙур үҙгәреш кисергән. Әммә беҙгә килеп еткән өлгөләре генә лә бай тарихыбыҙҙы һаҡлай.

Башҡорт халҡының милли кейеме көндәлек тормошобоҙға килеп инеүендә, һис шикһеҙ, республиканың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының роле ҙур. Беҙҙең районда ла был йәмәғәт ойошмаһы үҙенең эшмәкәрлеген, тәү сиратта, нәҡ ошо традицион милли костюмдарҙы һәм биҙәүестәрҙе тергеҙеүҙән башлап ебәрҙе. Бөгөн бөтә ауыл биләмәләрендә был йүнәлештә етди эш алып барыла. Айырыуса Первомай, Смаҡ, Үрге Юлдаш һәм Аптраҡ ауылы ағинәйҙәре әүҙем. Селтәр, ҡашмау тегеү буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрелде. Теккән, яһаған әйберҙәрен береһе лә күргәҙмә өсөн генә башҡарманы. Уларҙы төрлө кимәлдә үткән сараларға кейеп йөрөйҙәр. Балаларына, ейән-ейәнсәрҙәренә бүләк итәләр.

Милли кейемдең тәрбиәүи әһәмиәте лә бик ҙур бит, ағинәйҙәрҙән күреп, йәштәр, балалар ҙа ылыға хәҙер был кейемгә.

***Гөлназ ХУЖИНА, Учалы ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Һуңғы йылдарҙа урамда стилләштерелгән башҡорт халҡына ғына хас кейемле йәштәр йыш күренә. Батырсылыҡ итеп, түшенә селтәр таҡҡан йәки милли үҙенсәлеге булған өç һәм баш кейеме кейгәндәргә һоҡланып ҡарайым. Милли кейем тегеү, биҙәүестәр яһау менән шөғөлләнгән студияларыбыҙ, фирмаларыбыҙ барлыҡҡа килеүе һөйөнөслө. Республиканың иҫтәлекле даталары араһында Милли кейем көнө булыуы ла был тәңгәлдә эште әүҙемләштерәсәк кенә. Шулай уҡ республика етәксеһенең башҡорт колориты менән пинжәк тектереп кейеүе ир-егеттәр араһында милли кейем идеяһын таратырға булышлыҡ итәсәк. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы Артур Ҡәйепҡолов та дәүләт наградаһын алған саҡта был хаҡта билдәләп үтте. Был костюмдың киләсәктә башҡорт халҡының бренды булыуын теләне. Мин дә уның фекерен хуплайым, сөнки ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда ир-егеттәр милли кейемгә артыҡ иçе китмәй ине, хәҙер уға өҫтөнлөк биргәндәр күберәк булыр, тип уйлайым.

***Надежда ФОКИНА, тегенсе:*** Башҡорт халҡының милли кейеме матур ғына түгел, тәрбиәүи йәһәттән дә бик әһәмиәтле. Һуңғы осорҙа йыш ҡына тегергә тура килә. Сәхнә күлдәге түгел, ә көн дә кейеп йөрөргә тектерә йәштәр. Тәүге заказды алғас, китапхананан махсус китап алып уҡырға ла тура килде, сөнки быға тиклем ҡулыма алған эшем түгел ине. Уҡығас, башҡорт милли кейемдәре үҙе бер ғилем икәнен аңланым. Унда милләттең матурлыҡҡа ынтылышын да, зауығын да, күңел байлығын да, хыялын да күрергә мөмкин. Халыҡ традицияларынан артыҡ ситләшмәй генә, шул уҡ ваҡытта замансалаштырып тегәм. Әлегә ир-егет мөрәжәғәт иткәне юҡ. Шулай ҙа яғаһыҙ мосолман күлдәге тегеү буйынса тәжрибәм бар.

**Ынйы ӘҺЛИУЛЛИНА**
**яҙып алды.**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# ЕТЕ ЕГЕТ ЯРЫША

**Башҡортостанда "7 егет" реалити-шоуының икенсе миҙгелен төшөрөү башлана. Тапшырыу Урал аръяғының күркәм урындарында - Йылайыр һәм Ейәнсура райондарында төшөрөлә.**

Шоуға тотош республиканан: Ишембай, Ейәнсура, Белорет, Көйөргәҙе, Баймаҡ, Учалы райондарынан һәм Өфө ҡалаһынан егеттәр һайлап алынған. Ете ҡатнашыусы үҙенсәлекле шарттарҙа үҙҙәрен ныҡлыҡҡа һынап ҡарай. Көн һайын улар ғәҙәти тормошта бөтөнләй таныш булмаған яңы һөнәр өйрәнергә тейеш. Әйтәйек, балта оҫталығы, умартасылыҡ, йылҡысылыҡ серҙәренә төшөнөү, тимерҙән, күндән, туҙҙан әйберҙәр эшләү, уҡтан атыуҙа ярышыу. Проект еңеүселәрен телетамашасылар смс-тауыш биреү ярҙамында билдәләй. Һәр тапшырыу эфирға сыҡҡандан һуң тамашасыларҙың оҡшаған ҡатнашыусы өсөн тауыш биреү мөмкинлеге була. Проекттың финалы республиканың танылған шәхестәре һәм меценаттар менән ҙур сара итеп үткәрелә, унда шоуҙың еңеүселәре бүләкләнә. Төп приз - башҡорт тоҡомло ат. Проект мәҙәни традицияларҙы, шул иҫәптән халыҡ кәсептәрен һаҡлауға һәм пропагандалауға, йәш быуынды илһөйәрлек рухында, тыуған ергә һәм туған телгә һөйөү тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. Проект авторы - журналист һәм продюсер Рита Өмөтбаева.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҮПКӘЛӘГӘНДӘР...

## түбән төшә

Алтын ҡомһоҙҙоң күңелен ташҡа, күҙен аҡҡа әйләндерә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

"Аҙна буйы бер генә донъя һәләкәте лә булманы - был гәзиттәрҙе нинә һатып алам һуң мин?!" тип ҡысҡырған ти бер гәзит уҡыусы.

**(Карел Чапек).**

Хыянат үҙе үк мөхәббәт тураһында һөйләй. Былай таныш ҡына булған кешегә хыянат итеп булмай бит.

**(Марина Цветаева).**

Мин ғәйбәттәргә ҡаршы түгелмен. Ғәйбәт кешегә ҡыҙыҡһыныу уята.

**(Оливер Хассенкамп).**

Һине өндәшмәгәндә аңламаған кеше һөйләшкәндә аңлармы икән?

**(Эльберт Хаббард).**

Һуғышта ғына түгел, тыныс тормошта ла еңеү яулай кеше, тик ниңәлер был еңеүҙәргә һәйкәлдәр ҡуйылмай.

**(Фрэнк Хаббард).**

Ни өсөн кешеләр эштән түгел, ә борсолоуҙарҙан үлә? Сөнки кеше күп эшләмәй, ә күп борсола.

**(Роберт Фрост).**

Проблеманан ҡотолоуҙың иң яҡшы ысулы - уны хәл итеү.

**(Брендан Франсис).**

Һине үпкәләтерлек һүҙ әйттеләрме? Ә шулай ҙа башта уйла: үпкәләүгә тиклем эйелергә кәрәкме? Сөнки үпкәләү ул ҡайҙалыр түбәндә ята торған тойғо һәм уны күтәреү өсөн мотлаҡ эйелергә кәрәк...

**(Дмитрий Лихачев).**

Таҙа күңелле кеше бысраҡты шәйләмәй, бысраҡ күңелле кеше бысраҡ булмаған урында ла бысраҡ күрә.

**(Илья Шевелев).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Диңгеҙҙә көслө дауыл сыға. Елкәнле кәмә әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа һуғыла. Унда ултырған кешеләр бер урынға өйөлөшөп, Алланан ҡотҡарыуҙы үтенә башлай. Хужа Насретдин ғына кәмәнең бер мөйөшөндә тыныс ҡына ултыра бирә. Дауыл тына. Кәмә ярға килеп туҡтай. Шул саҡта кәмәләге кешеләр Хужа Насретдиндан һорай икән: "Хужа, беҙ барыбыҙ ҙа ҡурҡыуҙан ҡалтырашҡан саҡта, һине ҡурҡыу ялмап алманымы ни?" "Ә ниҙән ҡурҡырға ине һуң?" - тип һорай Хужа. "Нисек инде, дауыл ваҡытында үлем беҙҙән бер аҙым ғына ине бит, шуны күрмәнеңме ни?" "Эйе, бер аҙым ғына ине, ләкин ҡоро ерҙә йөрөгәндә лә үлем беҙҙе һағаламаймы ни?" - тип яуап биргән Хужа көлөмһөрәп..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираçты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баçылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
23 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 579/07